*Һин - ул һинең тәнең, матурлығың ғына түгел. Һин - ул һинең байлығың йә ярлылығың, эскән һыуың йә ашаған аҙығың, кейгән кейемең, йөрөгән машинаң, һинең вазифаң йә дәрәжәң генә лә түгел. Һин - һинең һәләттәрең, һинең изге эштәрең һәм ҡаҙаныштарың, һинең иманың һәм Аллаһыға инаныуың, һинең ихласлығың, һинең кешеләр өсөн килтергән файҙаң ул.*

*Абдулла КАРНИ.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18 - 24 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№3 (577)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡарҙар яуһа...**

күпләп эш өйөлә



4

**Академик һүҙлек менән...**

һәр кем маҡтана алмай



6

**Рухиәтте һаҡлау - милләтте һаҡлау ул,**

йәғни Яңы "Ҡуңыр буға" ижади ойошмаһы тураһында



8-9

**Тәҡдирҙәге Бөрйән ҡалаһы**



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең өсөн ниндәй матбуғат баҫмаһы иң мөһиме тип иҫәпләнә?

***Ғәлим ХИСАМОВ, яҙыусы:*** Матбуғат баҫмалары күп бөгөн. Мин уларҙың бөтәһен дә берләштерергә тейешле төп маҡсатты билдәләүсе бер генә талапты һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем. Был осраҡта матбуғат баҫмаларының төп йөҙө, йөкмәткеһе тураһында һүҙ барырға тейештер, тигән фекерҙәмен. Үкенескә ҡаршы, бөгөн ваҡытлы матбуғат баҫмаларының, электрон мәғлүмәт сараларынан айырмалы, хәле ауыр: күбеһенең тиражы бик түбән тәгәрәне. Бының сәбәптәренең береһе ниндәйҙер дәрәжәлә матбуғат баҫмаһының үҙенең ниндәй булыуына ла бәйле, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта ул үҙенең йөҙө, йөкмәткеһе менән генә лә тиражды әллә ни арттыра алмаясаҡ, сөнки ниндәй генә һәйбәт, көнүҙәк мәҡәләләр баҫылып тормаһын, бөгөнгө уҡыусы уны ҡабул итергә тулыһынса әҙер түгел. Был йәһәттән мин һуңғы егерме йылда барлыҡҡа килеп, үҙ мәҙәниәтен, "шәхси" мәҙәниәтен булдырған яңы быуын тураһында һүҙ алып барам. Ә инде өлкән быуын башҡа мөхиттә тәрбиәләнгән һәм әле лә шул килеш ҡалған, йәғни гәзит, китап уҡыуға һәләтен, рухи ихтыяждарын ҡандырыу теләген юғалтмаған, ләкин мөмкинлектәре матди яҡтан сикләнгәнлектән, матбуғат баҫмаларын алдырып уҡый алмай. Өҫтәүенә, почта таратыусылар эшенең торошо ла йыш ҡына матбуғат баҫмалары файҙаһына булмай сыға. Былар тираждарҙың кәмеүенә килтереүсе сәбәптәр булһа ла, матбуғаттың йөҙөн билдәләүсе мәсьәләләр түгел, шулай ҙа һүҙ ыңғайы әйтеп китеүҙе кәрәк тип таптым.

Ә бына ниндәй матбуғат баҫмаһы иң мөһим, тигәнгә яуап бик ябай: бөтөн эшен бөгөнгө тормошто үткәндәр һәм киләсәк менән бәйләп, анализлауға ҡора алған матбуғат баҫмаһы ғына барлыҡ уҡыусыларҙың да ихтирамына лайыҡ була ала, сөнки бөгөн уҡыусы яҙма матбуғат баҫмаларының хәбәр еткереү функцияһына бик мохтаж да түгел. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, оператив яңылыҡтарҙы кешегә һәр төрлө электрон мәғлүмәт саралары, интернет гәзит-журналдарға ҡарағанда тиҙерәк еткерә. Шуға күрә, бөгөн кешене уйландырырлыҡ аналитик мәҡәләләр, тарихи материалдарҙы күберәк биргән, уларҙың бөгөнгөбөҙ менән ауаздашлығын, бәйләнешен күрһәтә алған матбуғат баҫмаһы ғына отасаҡ, тип уйлайым мин. Икенсенән, иң мөһиме булыр өсөн бөгөнгө ысынбарлыҡты ла күрһәтеү, уны нисек бар, шулай яҙыу, анализлау, йәмәғәтселек фекере тыуҙыра алыу һәләтенә эйә булыу ҙа төп шарт. Ошо бурыстарҙы үтәй алған хәлдә генә яҙма матбуғат баҫмалары ауыр шарттарҙа ла йәшәйәсәк һәм сәскә атмаған хәлдә лә юғалыуға ла дусар булмаясаҡ!

***Зөфәр ТИМЕРБУЛАТОВ, философия фәндәре кандидаты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты:*** Ҡайһы бер матбуғат баҫмалары бөгөн үҙенең мөһимлеген икенсе йүнәлештәрәк аңлай башланы. Төрлө криминаль хәлдәр тураһында шаштырып яҙыу, милләт-ара ҡотҡо таратыу, төрлө ыҙғыштар, янъялдарҙы һүрәтләү уҡыусыларҙы күпләп үҙенә йәлеп итә, тип иҫәпләй бәғзе берәүҙәр. Был, әлбиттә, ҡайһы бер сәйәси кампаниялар ваҡытында әленән-әле баш күтәреп алған "һары" матбуғатҡа хас. Ә бына ысын мәғәнәһендә шәп һәм мөһим баҫма булып танылыу өсөн бөтөнләй икенсе йүнәлеш һәм маҡсаттар кәрәк.

Республикабыҙҙа ваҡытлы матбуғат баҫмалары 6 телдә нәшер ителә. Республикабыҙҙың етәксе органдары эшмәкәрлеген халыҡҡа еткереү бурысынан тыш, уларҙың һәр береһенең үҙ теленә бәйле бурыстары ла бар. Мәҫәлән, теге йәки был гәзит йә журнал башҡорт телендә сыға икән, был баҫма ошо телде һаҡлау, байытыу, унын үҫешенә булышлыҡ итеү, уҡыусыларын әсә теле аша тәрбиәләү, улар күңеленә изгелек орлоҡтары сәсеү, илебеҙгә, халҡыбыҙға һөйөү тойғоһо һалыу, рухыбыҙҙы йәшәтеү, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, ауыҙ-тел ижады хазиналарын һаҡлау кеүек мәсьәләләрҙе көнүҙәк тема итеп күтәрергә тейеш, тип уйлайым. Ошо маҡсаттарға тоғро баҫманы ғына мин иң мөһиме була, тип әйтер инем.


**(Дауамы 2-се биттә).**


ИҒТИБАР: КОНКУРС!

# ӨФӨЛӘРГӘ БАРАМ ӘЛЕ...

**Тарихтан билдәле булыуынса, баш ҡалабыҙ Өфөнөң бер нисә нигеҙ һалыныу датаһы бар. Шуларҙың иң һуңғыһы - 1574 йыл. Тимәк, быйыл Өфө ҡалғаһе һалыныуға 440 йыл тулыу датаһы билдәләнәсәк. Тап шул ваҡиға айҡанлы "Өфөләргә барам әле" тигән конкурс иғлан итәбеҙ.**



Конкурста бөтә йәштәге гәзит уҡыусыларыбыҙ ҙа ҡатнаша ала. Редакцияға яҙып ебәргән мәҡәләлә, һүрәтләмәлә, хәтирәлә нисек итеп тәүге тапҡыр баш ҡалабыҙ Өфөгә килеүегеҙ, ниндәй фәһемле, ҡыҙыҡлы йә ғибрәтле хәлдәргә тарыуығыҙ, шулай уҡ Өфөләге үҙгәрештәр, унын хәҙерге йөҙө тураһында һүрәтләргә тейешһегеҙ. Төп шарт: яҙғандарығыҙ мауыҡтырғыс, уҡымлы, фәһемле, ҡыҙыҡлы булһын. Күләме - 1-2 бит (компьютерҙа).

Конкурсҡа йомғаҡ июнь башында Өфө ҡалғаһе төҙөлөүҙең 440 йыллығын билдәләгән көндәрҙә яһаласаҡ. Иң яҡшы мәҡәләләр авторҙарын иҫтәлекле бүләктәр көтә. Ҡыҙыҡлы конкурста ҡатнашмай ҡалмағыҙ!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# АҠСА ТАБАМ, ТИП...
## намыҫ тураһында онотма



**Беҙҙең йәшәйешебеҙ тәбиғәт менән тығыҙ бәйләнгән. Уның матурлығына ҡарап, үҙебеҙ ҙә гүзәллеккә ынтылабыҙ, тәбиғәттән көс алабыҙ, урман-ҡырҙар бүләк иткән муллыҡты ҡулланабыҙ: ағасын ҡырҡабыҙ, еләк-емешен йыябыҙ, һыуын эсәбеҙ, хатта ташын да соҡоп алабыҙ. Берәүҙәр тәбиғәт байлығы менән тик үҙе генә ҡулланһа, икенселәр уны һатып, аҡса ла эшләй. Мин дә шул рәүешле кесәмде арыу ғына ҡалынайтып торам.**

Күптәрҙең уйына "Ағас менән эш итәлер", тигән уй килер, моғайын. Ләкин минең аҡса эшләү ысулым күпкә ябайыраҡ. Мин мүк һәм селек һепертке һатып "байып" ятам. Әлбиттә, сереп байырлыҡ аҡса килтермәһә лә, донъя кәрәк-ярағына етерлек аҡса эшләп була. Тик ялҡаулыҡты еңергә һәм көндөң эҫеһенә, һыуығына, ямғырына, серәкәй-себененә ҡарамайынса, урманға сығырға кәрәк. Мәҫәлән, мүк йыйыуҙың әллә ни ауырлығы юҡ. Булған урынында ул күпләп, күпереп үҫә һәм бер барғанда кәмендә 10-15 тоҡ йыйырға була. Әгәр ҙә бер өй өсөн 50-70 тоҡ мүк кәрәк, тип алғанда ла, миңә урманға дүрт-биш тапҡыр барырға тура килә. Тығыҙ итеп тултырылған бер тоҡ мүктең хаҡы - 100 һум. Шулай итеп, тырышҡанда бер аҙнала 5000-7000 һум аҡсаны кесәгә һалырға була. Был сумманы тоҡ һатып алыуға һәм бензинға киткән сығымдар бер аҙ кәметә, ләкин күпкә түгел. Тоҡто күмәртәләп һатып алырға, ә урманға ат менән йөрөргә була. Әҙ аҡса түгел. Ризаһығыҙмы? Бигерәк тә ауыл ерендә. Өйҙә телевизорға текәлеп, "Ҡайҙан аҡса табайым?", "Нимәгә йәшәйем?" тип ауыр уйҙарға батып, "Ауыр тормошта йәшәйбеҙ", тип зарланып ултырыуға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Тик ҡайһы берәүҙәр еңел аҡса артынан ҡыуып, мутлашыуҙан да тартынмай, йәғни мүкте күпертеп һалып, тоҡтарын бушаҡ итеп тултыра. Етерлек мүк алдым, тип ҡыуанған кеше төп башына ултыра. Ләкин мин быны хупламайым. Кеше алдында йөҙөң яҡты, күңелең таҙа булһын ул. Аҡса табам, тип, намыҫ тураһында оноторға ярамай. Ныҡлап тултырылған тоҡто кешегә тотторοуы ла күңелле.

Ә селек һепертке менән эш итеү ауырыраҡҡа төшә, сөнки уны ҡырҡыуы ла еңелдән түгел, шулай уҡ бәйләү өсөн дә арыу ғына ваҡыт кәрәк. Ләкин "Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй", тигәндәй, ынтылып, бер башлаһаң, эш ырай. Селек һеперткене берәмләп һатыу, бәлки, әллә ни табыш килтермәйҙер, ә бына күмәртәләп һатҡанда аҡса ла мул ғына төшә. Миңә, ғәҙәттә, ауыл хакимиәттәре, балалар баҡсалары, мәктәп һәм башҡа ойошмалар заказ бирә һәм үҙҙәре үк өйҙән килеп ала. Бер һеперткене 30 һум менән һатҡанда ла, бер миҙгелдә 500 һепертке бәйләп, 15000 мең аҡса эшләргә була.

**Ләкин кесә ҡалынайтам тип, тәбиғәт байлығына ҡомһоҙлоҡ менән ҡул һуҙырға ярамай, һәр нәмәлә лә сама белеү кәрәк. Тәбиғәткә рәхмәтле була беләйек.**

**Фәнис ҠОТЛОГИЛДИН.**
**Әбйәлил районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Һеҙҙең өсөн ниндәй матбуғат баҫмаһы иң мөһиме тип иҫәпләнә?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Нәҙерғәле АҪЫЛҒУЖИН, Белорет районы Шығай ауылынан ветеран педагог:*** Ҡайһы бармаҡты тешләһәң дә ауырта, тигәндәй, мин үҙ телемдә сыҡҡан бөтә матбуғат баҫмаларын да яратам, ихтирам итәм, өйөмә яҙҙырып алдырам. Уларҙың һәр береһе мөһим минең өсөн. Йылдағыса, иң беренсе булып "Киске Өфө"гә яҙылдым, "Йәшлек"һеҙ ҙә булмай, ә "Башҡортостан"дың "Йома" сығарылышын бик яраттым, ул элеккегә ҡарағанда бай йөкмәткеле булып сыға башланы, шуға ҡыуанам. "Ватандаш", "Башҡортостан ҡыҙы", "Шоңҡар", "Аманат" журналдарын мәктәптә эшләгәндә лә балалар менән бергәләп уҡый инек, әле лә уларҙан айырыла алғаным юҡ. Ҡыҫҡаһы, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: халҡыбыҙ бай беҙҙең, әсә телебеҙҙә күпме баҫма нәшер ителә! Әлбиттә, бөтә кеше лә уларҙың бөтәһенә лә бер юлы яҙыла алмай. Шулай эшләргә лә була: күрше-күлән алдан һөйләшеп, төрлө баҫмаларға яҙыла ла, аҙаҡ уны алмашлап йөрөтөп уҡыйҙар. Минең "Киске Өфө", мәҫәлән, өйгә ҡайтып та ингәне юҡ. Үҙем саҡ уҡып өлгөрөүем була, күршеләр алып сығып та китә. Шулай булырға тейеш тә: яҡшы, уҡымлы гәзитте өйҙә һаҡлап ятҡырырға ярамай, әйҙә, китһен ҡулдан-ҡулға - аң-белем, изгелек, уй-фекер таратһын, кемдәрҙеңдер "күҙен асһын", асылына ҡайтарһын, уйланырға мәжбүр итһен, иманға алып килһен... "Киске Өфө" әйҙәләгән үрҙәр етерлек. Уға эйәреп, күңелдәребеҙ күтәрелә, уйҙарыбыҙ таҙара, ғәмәлдәребеҙ яҡшыра, шуға ла "Киске Өфө" һәр беребеҙҙең дә йортонда көтөп алынған дуҫ иҫәпләнә. Алла бирһә, киләсәктә лә "Киске Өфө" һәм башҡа баҫмаларыбыҙ үҙ уҡыусыларының иң мөһим гәзите булып ҡалһын, тип теләйек.

***Ғәлиә ҒӘЛИМОВА, нәшерсе-ветеран:*** Минең өсөн һәр башҡорт баҫмаһы мөһим. Һәр береһенә яҙылам, рәхәтләнеп уҡыйым. "Киске Өфө" гәзитенең, мәҫәлән, хатта һәр һанын йыйып, тупланма алып барам. Бөтә эш-мәшәҡәттәремде ташлап уҡыйым. Уҡып өлгөрмәһәм, аҙаҡ ултырып уҡыйым. Унда яҙылғандар бер ҡасан да иҫкермәй. Һәр мәҡәлә, мәғлүмәт "мейегә" барып етә, йоғонто яһай, уйландыра, борсоуға һала. Төҙөү-туплау нигеҙендә әҙерләнгән китаптарҙа, башҡорт календарҙарында гәзит мәғлүмәттәрен файҙаланам. Һәр башҡорт ғаиләһе, һәр башҡорт кешеһе, балаһы ошо гәзитте башынан аҙағына тиклем уҡыһа, зиһене тәрәнәйер, белеме артыр, мәғлүмәте күбәйер, күңеле сафланыр, тип ышанам. "Киске Өфө" гәзите башҡорт милләтенә хеҙмәт итә, ул беҙгә бик кәрәк!

"Башҡортостан" гәзите, "Ағиҙел", "Шоңҡар", "Ватандаш", "Аманат" журналдары ла милләтебеҙҙең рухи аҙығы булырлыҡ. Ниндәй генә темалар, ниндәй генә рубрикалар юҡ уларҙа! Ә күпме яңы сәсмә әҫәрҙәр! Тик, ниңәлер, тираждары йылдан-йыл кәмей бара, шуныһы хафаға һала. Әллә интернет бәләһе, әллә вайымһыҙлыҡ. Йәмғиәтебеҙ һулышын һауыҡтырыу өсөн зыялы, зирәк һәм аҡыллы йәштәр кәрәк. Улар күпте белергә тейеш. Бигерәк тә үткән тарихыбыҙҙы. Интернет селтәрҙәрендә бит шаҡы-шоҡо мәғлүмәт күп, йәштәр иң кәрәклеһен генә һайлап уҡыһа икән дә! Күңел-халәте нығынып бөтмәгән балалар өсөн улар бигерәк тә хәүефле, тип уйлайым. 2013 йылдың декабрь айында "Шоңҡар"журналының ноябрь һанын уҡып сыҡтым. Республикала билдәле әҙип Гөлнур Яҡупованың "Күҙҙәр" тигән әҫәренә юлыҡтым. Шаҡ ҡатып уҡыным. Ниндәй көслө аллегория! Хикәйә геройының - дүрт аяҡлы эт хәленә төшөрөлгән малайҙың - хәсрәтле күҙҙәре әле булһа миңә ҡарап тора кеүек. Был бит беҙҙең ауырыу йәшәйешебеҙҙең хәсрәтле күҙҙәре: эскелек, наркоманлыҡ, етем балалар менән тулған балалар йорттары, ҡарттар йорттары... Гөлнур Яҡупованың ошо әҫәрен уҡыған һәр кем үҙенә фәһем алыр, бәләгә тарығандарға мәрхәмәтле, аяулы, йомшаҡ күңелле булырға тырышыр, тип уйлайым. Хәсрәтле күҙҙәргә тап булмаҫ өсөн, ҡәһәрләнгән, ситкә тибелгән әсе яҙмышлы балаларҙы ишәйтмәҫ өсөн...

Эйе, гәзит-журналдарыбыҙ дөрөҫ юлда, улар милләтебеҙ өсөн бик тә мөһим, уҡып, күңелдәребеҙҙе сафландырайыҡ ҡына.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ТУҠТА, МӘЛ!

# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН!



**Нуриман районының башҡорт теле уҡытыусылары.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә Рәсәй территорияһында Халыҡ-ара спорт ярыштарын ойоштороу һәм үткәреү буйынса ведомство-ара комиссия ултырышында 2021 йылдағы XI Бөтә донъя уйындарын үткәреүҙә Өфөнө ҡала-кандидат сифатында күрһәтеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Кәңәшмәне Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Дмитрий Козак үткәрҙе. Рәсәй заявкаһы Халыҡ-ара Бөтә донъя уйындары ассоциацияһының Ойоштороу комитетына 2014 йылдың май аҙағына тиклем тапшырыласаҡ. Уйындарҙы үткәреү урыны тураһындағы һуңғы ҡарар 2015 йылда ҡабул ителәсәк. Ярыштар 11 көн дауамында 2021 йылдың июль-авгусында үтәсәк.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов I.A.S. International (Катар) компанияһы етәксеһе менән осрашты, уға "бергә эшләй алырлыҡ" бер нисә проектты атаны. Атап әйткәндә, тимер мәғдәндәрен ҡулланып, юғары сифатлы суйын етештереү буйынса тау-металлургия комплексы, республика райондарының береһендә глюкоза, фруктоза алыу өсөн игенде тәрән эшкәртеү буйынса комплекс төҙөлөштәре тураһында һүҙ барҙы. Үҙ сиратында Иссам Абдул Салам,Өфөлә ҙур мөмкинлектәр һәм перспективалар күреүен билдәләне.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Хөкүмәт Президиумы ултырышы үткәрҙе, унда 2013 йылда юл төҙөлөшөнөң яҡынса йомғаҡтары ҡаралды һәм 2014 йылға маҡсаттар ҡуйылды. Төбәктә юл төҙөлөшөн финанслау һуңғы өс йылда үҫә бара, тип билдәләнде. 2013 йылда 11,6 миллиард һум үҙләштерелгән - ул 2010 йылға ҡарағанда 70 процентҡа күберәк. Быйыл юл торошон һәм бөтә юл инфраструктураһын яҡшыртыуға 11,7 миллиард һумдан ашыу аҡса тотоноу планлаштырыла.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Сочиҙа 7-23 февралдә үтәсәк XXII Ҡышҡы Олимпия уйындарына барырға әҙерләнә. Ғәскәровсылар мәҙәни программа сиктәрендә 11 февралдән 15-нә тиклем Башҡортостан сәнғәтен күрһәтәсәк. Унда ҡатнашыу өсөн Сочиға Рәсәйҙең 100-ләгән алдынғы ижади коллективтарының килеүе көтөлә.Танылған коллектив 45 минутлыҡ программаһы менән Олимпиаданың дүрт төп майҙансығында сығыш яһаясаҡ. Артистар республика Президентының грантын алған "Ғәскәров мираҫы" яңы программаһынан номерҙар күрһәтәсәк. Билдәләп үтергә кәрәк, яңы программа өсөн бөтә костюмдар яңыртылған.

✔ Һуғы ваҡытта "Урал батыр" эпосына ҡаршы асҭыртын һөжүм башланды. Мин уны бер-ике кешенең генә эшелер тип уйлағайным, мәкер менән ҡоролған үрмәксе ауы икән. Үрмәксеһе ҡайҙа? Өфөләме, Ҡаҙандамы, Мәскәүҙәме?



ШАҢДАУ

# ҠУЯН ҺЫМАҠ...

## хәйлә ҡора белһәк ине лә бит



**Урал Мостафиндың "Бөгөнгөгә - битараф, киләсәккә вайымһыҙ халыҡ булмайыҡ!" (2013 йыл, №49) мәҡәләһе бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр. Мин үҙем күп тапҡыр уҡып сығып һоҡландым. Сөнки ул мәҡәләлә беҙ уйлаған уйҙар, беҙ кисергән хистәр сағыла.**

Урал Мостафин бик күп мәсьәләләрҙе күтәрә был сығышында, һорау ҡуя һәм үҙе үк уларға яуап та бирә. Эйе, ул яҙғанса, "Кәмселектәр менән килешеп, кәмһетеүҙәргә түҙеп, сәбәпһеҙ ҙә сигенеп йәшәү..." ярамай. "Әлбиттә, - тип яҙа автор, - бөтә яҡтан ҡамалып йәшәгән халыҡтың ҡапыл ғына ҙур уңыштарға өлгәшеүе икеле. Ҡырылмаһа ҡырҡ күҙәтеүсе, эҙәрлекләүсе органдар булыуына ҡарамаҫтан, ҡоторғандар ҡотора, баҫылғандар баҫыла, уңайлы ултырғандар, "үҙгәртеп ҡороуҙар" һылтауы менән, халыҡ милкен талай бирә..."

Урал Мостафиндың һүҙҙәренә өҫтәп, мин шулай тиер инем: башҡорттар ғына түгел, Рәсәйҙәге аҙ һанлы таңы бик күп милләттәр тынып, түҙеп, үҙ фекерен әйтмәй йәшәй бит хәҙер. Ниндәйҙер ҡурҡыу хисе биләне илде. Әйтерһең дә, 1937 йыл әйләнеп ҡайтты. Гәзит-журналдарҙы уҡыһаң да, берәүҙәр түҙеп, "шөкөр" итеп йәшәргә, икенселәр үҙ мәнфәғәттәребеҙҙе яҡларға саҡыра, ә халыҡ быны аптырап уҡый, уйҙарыбыҙ бутала. Хатта совет осоронда ла, иҫегеҙҙәлер, Башҡортостанда баҫылған гәзиттәрҙә Үҙәк гәзиттәрҙең күсермәһе итеп ҡалдырырға, тигән ҡарарға ҡаршы сығып, КПСС етәкселегенә барып, үҙ дәүләһен белдереүсе журналистар табылған. Эштәренән ҡыуылһа, ҡыуылғандар, әммә республика журналистарының мәнфәғәтен яҡлап ҡала алғандар...

Күптән түгел телевизорҙан матур бер йәнһүрәт ҡараным. Ҡуянҡай урмандан китеп барғанда бер ягуарға тап була ла, ҡалтыранып: "Мине ашар алдынан аппетитың яҡшырһын өсөн ошо урманда саҡ ҡына саф һауа һулап йөрөп киләйексе",- тигән тәҡдим яһай. Ягуар ризалаша. Урман буйлап йөрөп ятһалар, быларҙың ҡаршыһына ҡыр суҡаһы килеп сыға. Ул ҡуянға ташланам ғына тигәндә, уның йәнәшендәге ягуарҙы күреп, йәһәт кенә ситкә тайшана. Ҡуян менән ягуар ары китә. Бына бер мәл уларҙың ҡаршыһына ҙур йылан осрай. Ул да ҡуянды йоторға әҙерләнгән мәлдә йәнәшендәге ягуарҙы күреп ҡалып, ҡыуаҡлыҡҡа ҡаса һала. Артабан китәләр былар. Ҡаршыларына бүре килеп сыға һәм гәҙәтенсә ҡуянға ташланырға уйлай, тик ул да ҡуян эргәһендәге ягуарҙы күреп ҡала һәм, ҡурҡып, тиҙ генә ҡасып китә. Ягуар, был бик ҡыйыу ҡуян булып сыҡты әле, бөтәһе лә унан ҡурҡып ҡаса, тип уйлап, уны ашамаҫҡа ҡарар итә. Шул мәлдән алып был урманда ҡуян иркен, ирекле йөрөй, ти, бигерәк тә ягуарын эйәртеп сыҡҡан көндәрҙә...

Ә беҙҙең эйәртеп сығыр ягуарыбыҙ юҡ шул. Унан һуң, ҡуян кимәлендә генә булһа ла хәйлә ҡора белһәк ине лә бит...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# БЫУЫЛҒАН ҺЫУ - ЙӘШӘРӘ...

## аҡҡаны - саф була



**Гәзиттең былтырғы 49-сы һанында Урал Мостафиндың "Бөгөнгөгә - битараф, киләсәккә вайымһыҙ халыҡ булмайыҡ!" тигән мәҡәләһе баҫылғайны. Мәҡәлә күңелемә хуш килде, уға ҡарата үҙемдең фекерҙәрҙе яҙмайса булдыра алманым.**

Урал Мостафин "Кайҙа һуң бөгөнгө заман геройҙарыбыҙ?" тигән ҙур һорау ҡуя. Мин дә шул уҡ һорауҙы ҡабатлап ҡуям: эйе, ысынлап та, ҡайҙа һуң хәҙерге заман геройҙарыбыҙ, йәш быуын, балаларыбыҙ кемдәргә оҡшарға тейеш һуң? Әллә капитализм тигән ижтимағи ҡоролошта заман геройы тигән принцип бөтөнләй ҡабул ителмәйме икән? Ни өсөн тигәндә, бөтөн нәмәне был ижтимағи ҡоролошта танышлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, барыһынан бигерәк аҡса ғәли йәнәптәре хәл итә.

Ыңғай герой тигәндән, ундайҙар һәр заманда ла йәш быуын вәкилдәренең араһынан үҫеп сығырға тейештәр, тип уйланыла. Барыбыҙға ла мәғлүм, ағып ятҡан йылғаны быуһаң, унда йыйылған һыу йәшәрә, йылға үҙәне мүкләнә башлай. Ә ағып ятҡан һыу һәр ваҡыт таҙа, саф була. Беҙҙең хәҙерге тормошобоҙ ҙа шул быуаға оҡшаған. Йәмәғәт ойошмаларының күбеһендә хәҙерге ваҡытта өлкәндәр етәкселек итә. Ғөмүмән, йәштәргә йөмошсо малайға ҡараған һымаҡ ҡына ҡарайҙар. Быуаның эргәһенә йыйылған һыу ғына улаҡтан аға алған кеүек, ҡарттарҙың һәр һүҙен хуплап йөрөгәндәр генә артабан үҫә ала. Бындай йәштәр араһынан ыңғай геройҙы табырмын, тимә. Улар йәш кенә көйөнә өлкәндәргә оҡшатып ҡорһаҡ үҫтереп, сит ил маркалы машиналарҙа ултырып, әллә кем булып йөрөйҙәр. Бынан егерме йыл элек республикабыҙ суверенитеты иғлан ителгәндән һуң да тап ана шундай, партиялағы ағайҙарының янында йөгермәләгән йәштәр власҡа үрмәләне һәм нимә килеп сыҡты: республикабыҙ етәкселеге алышынғайны, уларҙың барлыҡ төҙөгән нәмәләре ҡолаңы ла төштө. Беҙҙең хата шунда - күберәк инициативалы, донъяға үҙ ҡарашы булған, ҡулынан эш килгән булдыҡлы йәштәр үҫтерелмәне. Беҙҙең һуңғы егерме йылға йомғаҡ яһағанда, минеңсә, иң ҙур хатабыҙ шунда булды.

Һаман да совет заманынан арына алмайбыҙ. Минең тыуған ауылым Икенсе Этҡолдо донъялағы иң ҙур ауыл тип хаҡлы рәүештә әйтә алам. Уға Өфө түгел, хатта Мәскәү ҙә тиңләшә алмай. Әлбиттә, был урам атамаларына ҡағыла. Беҙҙең ауылда урамдар шул хәтлем күп, хатта исем тапмағас, өс урам Ленин, тағы өс урам "улица Мира" тип атала. Темәстә башҡорттарҙы ҡырған вәхшиҙәргә, Смоленск полкы һалдаттарына һәйкәл бар. Ә улар үлтергән башҡорттарҙың ҡәбере ҡайҙа? Элекке ҡарт коммунистар йәне-тәне менән вәхшиҙәрҙе һаман да яҡлап маҡтайҙар. Ә бит граждандар һуғышында большевиктар башҡорт халҡына, бөтөн ил халҡына ҡаршы геноцид үткәргән. Был - факт. Донъяла дошмандарына һәйкәл ҡуйған башҡа халыҡ бармы икән?

Һуғы ваҡытта "Урал батыр" эпосына ҡаршы асҭыртын һөжүм башланды. Мин уны бер-ике кешенең генә эшелер тип уйлағайным, мәкер менән ҡоролған үрмәксе ауы икән. Үрмәксеһе ҡайҙа? Өфөләме, Ҡаҙандамы, Мәскәүҙәме?

Бына ошондай шарттарҙа үҫеп килгән йәш быуынды тәрбиәләр хәҙерге заман геройҙарын ҡайҙан табаһың инде? Шуға күрә, Урал Мостафин әйтмешләй, "...арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең данлы исемдәренә һыйынып, йәҙәбеҙҙә һаҡларға, милләтебеҙҙе яҡларға тырышабыҙ" инде.

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы.**

ӘЙҘӘ, РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

# ИЗГЕ ҒӘМӘЛГӘ МАЯ

**"Киске Өфө"гәзитенең үҙ уҡыусыларын яҡшы, изге ғәмәлдәргә, матур ғәҙәттәргә әйҙүкләп-әйҙәләгән рубрикаларын бик оҡшатам. Кеше күңеленә ихлас бер яҡтылыҡ һирпеп, иң тәүҙә үҙен уҡырға саҡырып, гәзит битен асыу менән күҙгә салынып тора бындай мәҡәләләр. Уларҙы уҡып, ысынлап та, ниндәйҙер бер файҙалы эш, изгелек эшләге килеп китә.**

Яңыраҡ баҫылған шул рубрикалар араһындағы береһе "Әйҙә, рәхмәтле булайыҡ!" тигән саҡырыу ташлағайны, шул мине ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашыу маҡсатында ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр итте. Бәлки, телгә алып һөйләрлек, хатта гәзиткә яҙып ебәрерлек әһәмиәтле лә күренмәҫ ул фекерҙәр, ләкин ана шул әрнеүле уй-фекер тыуыуға сәбәпсе күренештәр, хәл-ваҡиғаларға мин көн һайын тап булам. Мәҫәлән, юлында осраған ҡайһы берәүҙең, һине тапарҙай булып, оломо-кесеме тип ҡарап тормай, бәреп үтеп китеүе тән әрнеүенән былай йән әрнеүенә сәбәп була. Йәки бына шәп итеп кейенгән, буянған көйәҙ ханым туп-тура минең өҫкә табан килә. Ауыр сумкамды ситкә өҫтөрәп, янтайып юл бирәм йәш ҡатынға. Еңелеүем, хәлдең минең файҙаға түгеллеге менән күндәм генә килешәм, ләкин быным минең өсөн яҙыҡ түгел, киреһенсә, бәлки, яҡшы икәнен дә аңлайым. Юл таҙартыу, юл төҙәтеү, юл биреү- ҙур сауап, тип өйрәтә ине әсәйем. Тик әлеге мәлдә мин сауап тураһында уйламайым, ә тапарҙай булып минә яҡынлашҡан ғәләмәттән ҡотолоу яйын ҡайғыртам.

Көн һайын бер үк тупһыҙлыҡ, бер үк туң күңеллелек менән бәрелешә торғас, үҙем дә әллә шул ыңғайға төшөп барам төҫлө тойолоп, хәүефләнеп китәм. Шунан шым ғына үҙ алдыма һөйләнәм: юҡ инде, хатта юрый ҙа шулай тупһыҙ ҡыланырға ҡулдан килмәй бит, ебегән, тием. Автобуста урын биргәндәр икән, йәйелеп китеп, рәхәтләнеп ултыр ҙа бар инде: йәштәр бит, баҫып торһондар әйҙә. Ә мин, рюкзактарын артмаҡлап, дәрестән ҡайтып барған ошо балаҡайҙарҙы йәлләп, эсем өҙөлә: улар ҙа бит әҙәм балаһы, арып-асығып, талсығып уҡыуҙан ҡайтып баралар, етмәһә - әрләнә-әрләнә. Ҡайһы бер өлкәндәр юғиһә уларҙы битәрләргә генә белә. Ә бит шунда арҡаларынан һөйөп, рәхмәт әйтһәң, һикереп тороп урын биреү уларҙың һәйбәт гәҙәтенә әүерелер ине. Мин тап шулай итәм дә. Арҡаларынан һөйәм дә, рәхмәт әйтәм. Хатта магазинға йә ҡайҙа инеп барғанда ишек асып, юл биреп торғандарға ла сал башымды эйеп, рәхмәтемде әйтеп китәм. Аҙаҡ улар ошо ғәмәлдәрен гәҙәткә әүерелдерһендәр, тигән теләктән дә, әлбиттә. Сөнки яҡшы мөғәмәлә фәҡәт шундай уҡ яуап-мөнәсәбәт тыуҙырасаҡ. Бәләкәй генә изгелек йоратын да яуапһыҙ ҡалдырмайыҡ, саҡ ҡына игтибарлыраҡ, саҡ ҡына йомартыраҡ булайыҡ, тип әйтке килә шуға күрә. Яҡшылыҡ яҡшылыҡ тыуҙырһын, изгелектән фәҡәт изгелек кенә бар булһын өсөн. Ә бит һәр нәмә лә рәхмәттән башлана, йәлләмәгеҙ рәхмәттәрегеҙҙе! Әгәр кешене ғаиләһендә лә, мәктәптә лә рәхмәт әйтергә өйрәтә алмағандар икән, бының өсөн бер ҡасан да һуң түгел. "Киске Өфө"нәң ана шулай рәхмәт әйтеп өйрәнергә саҡырыуы - ҙур-ҙур изгелектәрҙең алтын маяһы ул, афарин.

**Фирүзә ИШБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда уҡытыусылар 2014 йылда ла класс етәкселеге өсөн өҫтәмә түләүҙәр аласаҡ. 25 уҡыусы булған кластарҙа класс етәкселәре элеккесә 1,5 мең һум аласаҡ. Бынан тыш, быйылғы бюджетта бөтә уҡытыусыларға дәртләндереү сифатында түләүҙәр ҡаралған. Әйткәндәй, 2013 йылдың яҡынса йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың дөйөм белем биреү системаһында уртаса эш хаҡы 23 692 һум (2012 йылға ҡарата артыу 30 процент тәшкил итте) тәшкил итә.

✔Был арала Башҡортостанда һауа торошоноң боҙолоуы күҙаллана: урыны менән көслө ҡар яуыуы, буран сығыуы, юлдарға һырынты һалыуы, ел тиҙлеге секундына 18-23 метрға етеүе көтөлә. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса Баш идаралығынан, һаҡлыҡ саралары күрергә кәрәк, тип иҫкәртләр.

✔Республика башлығы Рөстәм Хәмитов үҙенең бойороғо менән Рәмил Дилмөхәмәтовты Башҡортостан Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары итеп тәғәйенләне. Рәмил Хөрмәт улы ошоға тиклем Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары - муниципаль милеккә идара итеү буйынса комитет рәйесе, баш ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләне.

✔Башҡортостан Президенты Белорет районы буйынса эш сәфәре барышында урындағы аҙыҡ-түлек магазиндарының тауар төрҙәре менән ҡыҙыҡһынды. Тауар төрҙәрен өйрәнеү барышында, сауҙа предприятиеһы колбасаларҙың күп өлөшөн Силәбе өлкәһенән килтереүе асыҡланды. "Урындағы магазиндарҙа күберәк республикала етештерелгән тауарҙар һатылыуы мотлаҡ", - тип тағы бер тапҡыр иҫкәртте Рөстәм Хәмитов.

✔Башҡортостан Президенты "1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итеүҙе әҙерләү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Төбәк ойоштороу комитетына "Еңеү" Рәсәй ойоштороу комитеты менән берлектә 2015 йылда тормошҡа ашырырға кәрәк буласаҡ тантаналы саралар планын эшләргә һәм рәҫлағарға ҡушылды.

**“Башинформ”дан.**

ШУНДАЙ ЯҢЫЛЫҠ

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫ БЕРЛӘШӘ

**Республикала ике юғары уҡыу йортон - М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты менән Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университетын берләштереп, "Башҡортостандың яңы юғары мәктәбе"н булдырыу заман талаптарына яуап бирәсәк, тип иҫәпләй БДПУ-ның ректоры Раил Әсәҙуллин.**

- Башҡортостанда белгестәр әҙерләү торошон тикшергән ваҡытта килгәйне был идея. Хеҙмәт баҙары мониторингы һөҙөмтәһендә асыҡланыуынса, республиканың нефть-техник университеты - яғыулыҡ-энергетика колледжы, ә авиация университеты авиация колледжы менән бергә хеҙмәттәшлек иткәнгә күрә, республика иҡтисадының үҙҙәре ҡараған сегментын тулыландырып тора. Тап ошо ваҡытта төбәк иҡтисадының социаль сегменты тулы түгеллеге билдәле булды. Был өлкәлә эшләй алырлыҡ белгестәр әҙерләүсе вуздар төрлө-төрлө һәм улар социаль кластер булдырыу урынына, йышыраҡ үҙ-ара конкурентлыҡ итеү менән булыша.

2005 йылда БДПУ инициативаһы менән "Башҡорт педагогик университеты комплексы" тип аталған педагогик уҡыу йорттары ассоциацияһы булдырылғайны. Был комплекс республиканың педагогик вуздары һәм колледждарын берләштереп, уларҙың потенциалын асыҡлап, үҙ-ара килешеп эшләү мөмкинлеген бирҙе. Ул саҡта Рәсәйҙең башҡа төбәктәре вуздары ла был комплексҡа инергә теләк белдерә. Уңышлы эшмәкәрлек алып барһа ла, комплекс бар талаптарға ла яуап бирә алмай. Шуға ла вуздар етәкселеге республика территорияһында социаль-иҡтисади, педагогик һәм гуманитар профилдәге белем биреү программаһын тормошҡа ашырыусы вуздарға берләшеп, яңы юғары уҡыу йорто булдырыу процесына ҡушылырға саҡыра һәм РФ Мәғариф һәм фән министрлығына мөрәжәғәт итә.

- Ике йыл элек Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты етәкселегенә яңы быуын вузы төҙөү тәҡдиме менән сыҡҡайныҡ. Ул саҡта Башҡортостан иҡтисады секторында барған инновацион процестарҙы яйға һалыу өсөн белгестәр әҙерләү һәм ғилми-методик база булдырыу тураһында килешкәйнек. Был идеяны нығылап өйрәнеү талап ителгәнлектән, ваҡыт һуҙылды һәм 2013 йылдың 27 декабрендә беҙ был яңы вузды БДПУ базаһында булдырырға хәл иттек, - ти Раил Әсәҙуллин.

Бөгөнгө көнгә университеттар ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн үҙҙәренең ғилми-методик һәм кадрҙар ресурстарын берләштерергә һөйләшкән.

- Глобаллашеү процесы юғары белем биреү өлкәһендә үҙгәрештәр талап итә: алдынғы вуздар араһында конкуренция көсәймәй, ә яңы сифатлы кимәлгә күсә. Был кимәлдә традицион вуз төшөнсәһе лә яңыса буласаҡ. Юғары белем биреү өлкәһе ҙур үҙгәрештәр талап итә, - тип белдерә БДПУ ректоры.

Вуздарҙы берләштереү күп мәсьәләләрҙе хәл итмәксе. Етәкселәр раҫлауынса, һәр хәлдә, был ике юғары уҡыу йортоноң бер вузға әүерелеүенән студенттар отасаҡ ҡына. Бигерәк тә Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты студенттары ҡәнәғәт буласаҡ, сөнки хәҙер улар БДПУ-ның бай спорт-һауыҡтырыу базаһы, ғилми-методик һәм лаборатор фонды менән ҡуллана, билдәлелек яулаған ижади коллективтарҙа шөғөлләнә аласаҡ.

**Эльмира САБИРОВА.**

МИҘГЕЛ МӘШӘҠӘТТӘРЕ

# ҠАРҘАР ЯУҺА...

## күпләп эш өйөлә



**Метеорологтар әйтеүенсә, ҡарҙың ҡасан, ниндәй миҡдарҙа яуырын бер нисек тә күҙаллап, алдан белеп булмай. Иртәгәге көнгә ҡарата яһалған күҙаллауҙар ғына аныҡыраҡ килеп сыға. Шуға күрә, ҡаланың ҡар таҙартыуға яуаплы хеҙмәттәре ҡышҡа күпкә алдан әҙерләнә башлай. Көҙ-ҡыш миҙгеле етеүен барлыҡ хеҙмәткәрҙәр ҙә "хәрби поста" ҡаршы ала. Шуның өсөн генә ҡар яуыуы ҡот осҡос гәрәсәт булып түгел, ә матур бер мәл булып хәтерҙә ҡала. Һәр хеҙмәткәр үҙ эшен, үҙенә йөкмәтелгән бурыстарҙы яҡшы белгәне һәм ғәмәлдәге ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәгәне өсөн генә ошондай һөҙөмтәгә өлгәшелә.**

Ҡыштар төрлөсә килә. Һәр ҡыштың һауа шарттары ла алдағыларынан нимәһе менән булһа ла айырыла. Башҡортостан гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү идаралығынан белдереүҙәренсә, быйылғы ҡыш былтырғыһынан ҡарҙың күплеге менән айырыла. 2012, 2013 йылдарҙың декабрь айҙарында яуым-төшөм бер сама - норманан 50 процентҡа юғары булһа, ағымдағы йылдың ғинуары иһә күптәрҙе аптыраšта ҡалдырҙы. Сағыштырыу өсөн: 2013 йылдың декабренең беренсе декадаһында ҡар айлыҡ норманың 43 проценты күләмендә яуһа, 2014 йылдың ғинуарында - 200 процент, йәғни ике нормалыҡ яуҙы. Айырма 150 проценттан да күберәк килеп сыға. Шуны ла әйтеп үтәйек: күп йылдар буйы ошо йылдарҙа күҙәтелгән яуым-төшөм миҡдарының уртаса дәүмәле сағыштырыу өсөн эталон итеп алына һәм "айлыҡ норма" тип атала.

2013 йылдың 13 ғинуарында алынған күрһәткес буйынса Өфө ҡалаһында ҡар ҡатламы ҡалынлығы 36 сантиметр булһа, 2014 йылдың 13 ғинуарында - 41 сантиметр тәшкил итә.

Метеорологтар күрһәткестәре ҡаланың коммуналь хеҙмәте эштәре йомғаҡтары менән дә дәлилләнә. Быйылғы ҡыш башынан Өфө урамдарынан 722899 кубометр ҡар ситкә сығарып ауҙарылған, үткән йылдың ошо уҡ арауығында был һан 519854 кубометр тәшкил иткән. Айырма - һиҙелерлек.

Ҡарҙың күплеге, һис шикһеҙ, коммуналь хеҙмәттәр эшендә лә сағылыш таба. Эштең күләме арта, йышыраҡ көсәйтелгән режимда эшләргә тура килә. Ундай мәлдәрҙә урамдарҙа тәүлек әйләнәһенә эш ҡайнай. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, коммуналь хеҙмәттең өс төрлө режимы бар. Уларҙың һәр ҡайһыны теге йәки был һауа торошонан сығып билдәләнә. Ҡар яуа башланы икән, ҡар таҙартыуға шундуҡ өҫтәмә көстәр йәлеп ителә, тигән һүҙ. Ул сағында көсәйтелгән режимда ҡаланың 300 берәмек коммуналь хеҙмәт техникаһы, 300-ләп хеҙмәткәре юлдарҙы таҙарта, тағы 130 махсус машина-тракторҙар һәм 900 урам һепереүсе Өфө ҡалаһының торлаҡ хужалығы идараһы ҡарамағындағы йорттарҙың ишек алдарын, эргә-тирәһен ҡарҙан таҙарта.

Һауа торошо ниндәй генә сюрприз әҙерләмәһен, ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре үҙ эшен еренә еткереп башҡара. Техника етерлек, уның паркы ла әленән-әле яңыртыла, күпләп бәләкәй габаритлы техника һатып алына. Шулай ҙа тәбиғи факторҙарҙан тыш, ҡайһы бер күренештәр коммуналь хеҙмәткәрҙәрҙең былай ҙа еңел булмаған эшендә ауырлыҡтар тыуҙыра. Әйтәйек, бөтөн ҙур ҡалаларҙың бәләһенә әйләнгән күренеш - автомобилдәрҙе юл ситтәренә ҡалдырыу ҡар таҙартыуҙы тулы күләмдә башҡарыуға ҡамасаулай. Урамдарҙа автомобилдәр һаны артыуы, бер яҡтан, халыҡтың матди хәленең яҡшырыуын күрһәткән ыңғай күренеш булһа, икенсе яҡтан, ҡала хужалығында бихисап проблемалар тыуҙыра. Шуға ҡала халҡынан, машиналарын тәғәйенләнмәгән урындарға ҡалдырмауҙарын һорайбыҙ һәм автомобиль хужалары был һүҙебеҙҙе аңлап ҡабул итер, тип өмөтләнәбеҙ. Урамдарҙың таҙалығы ла, тығыҙлығы ла шуға бәйле бит.

**Камил ЮЛАЕВ,**
**Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика идаралығы белгесе.**

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ...

# ҠАР ТАҘАРТЫУҘЫҢ...

## өр-яңы ысулы

**Һуңғы көндәрҙә, улай ғына ла түгел, һуңғы йылдарҙа, баш ҡалабыҙ Өфө урамдары ҡарҙың самаһыҙ күп яуыуы арҡаһында үтеп сыҡҡыһыҙ боламыҡҡа, йырып сыҡҡыһыҙ проблемаға әүерелде. Урам таҙартыусы машиналар хет өс, хет дүрт сменаға, 200-300 процент тырышлыҡ менән эшләһә лә, Тәбиғәт ғәли йәнәптәре алдында беҙ үтә көсһөҙбөҙ шул. Ғалимдар әйтеүенсә, был хәл йылдан-йыл тағы ла ҡиҫкенләшә барасаҡ.**

Беренсенән, йылдан-йыл машиналарҙың һаны арта, икенсенән, урам һепереүселәрҙең боронғоса "крәҫтиән ысулы" менән генә алға барып булмайҙыр ул. Сөнки юл ситенә өйөлгән ҡар урамдарҙы тарайта, ә инде йыйылып киткән ҡарҙы ҡала ситенә ташый башлаһаң, ҡаланың ярты бюджеты кәрәк буласаҡ. Килеп тыуған ауыр хәлдән нисек сығырға һуң? Бының өсөн әллә ни ҙур аҡыл да кәрәкмәйҙер, тип уйланыла.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙе хәҙер Күп функциялы үҙәк аша алырға була. Өфөлә бындай ике үҙәк эшләй: Яңы күпер урамы, 8-се йорт ("Сәнғәт училищеһы" туҡталышы) һәм Интернационал урамы, 113-сө йорт ("Тынысһыҡ урамы" туҡталышы). Үҙәктәр иртәнге 8-ҙән киске 20 сәғәткә тиклем тәнәфесһеҙ эшләй, йәкшәмбе - ял көнө. Күрһәтелгән хеҙмәттәр тураһында аныҡыраҡ мәғлүмәт Өфө ҡала округы хакимиәте сайтында (www.ufacity.info) һәм Үҙәктең үҙенең сайтында (www.mfcrb.ru) бар. Белешмәләр өсөн телефондар: +7(347) 246-55-33; 246-55-44.

✔2014-2016 йылдарға Башҡортостан Республикаһы һәм "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Документҡа Куйбышев тимер юлы начальнигы Сергей Соложенкин һәм БР Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рәүф Ноғоманов ҡул ҡуйҙы. Документта вокзалдарҙы һәм уның эргә территорияһын реконструкциялау һәм модернизациялауға айырыуса иғтибар бүленә.

✔Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙа дөйөм мөлкәтте капиталь ремонтлау буйынса республика программаһы ҡабул ителде. Документты әҙерләүселәр, республиканың торлаҡ фонды әлеге ваҡытта яраһыҙ нығ туҙған, тип билдәләне. Бөтә күп фатирлы йорттарҙың 41 проценты 40 йылдан ашыу элек төҙөлгән. 47 процент тирәһе 30 проценттан ашыуға туҙған һәм капиталь ремонтҡа мохтаж.

✔15-17 майҙа Астананың конгресс-холында "KazFood 2014" һәм "Kazakhstan International Hahal Expo 2014" дүртенсе берләшкән халыҡ-ара күргәҙмә үтә. "KazFood 2014" халыҡ-ара күргәҙмәнең төп маҡсаты - ватан һәм сит ил предприятиелары тауарҙарын һәм хеҙмәттәрен күрһәтеү, партнерҙар эҙләү, илдәр араһында тауар әйләнешен яйға һалыу, баҙарҙы донъя сифатына тап килгән тукланыу азыҡтүлеге менән байытыу. Күргәҙмә сиктәрендә һөнәри конкурс, семинарҙар, "түңәрәк өҫтәл"дәр, ҡатнашыусы фирмалар презентацияларын үткәреү ҡаралған.

✔Өфө дәүләт авиация техник университеты эргәһендә һәләтле балалар өсөн йәкшәмбе математика мәктәбе асылды. Унда 10-11 класс уҡыусылары бушлай шөғөлләнә ала.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ДОНОРҘАРҒА АҠСАЛАТА ТҮЛӘҮ



**2014 йылдың 1 ғинуарынан алып "Рәсәйҙең почетлы доноры" йәки "СССР-ҙың почетлы доноры" билдәләре менән наградланған граждандарға йыл һайын бирелә торған аҡсалата түләүҙәр тәртибе үҙгәрҙе.**

Башҡортостан Хеҙмәт министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко аңлатыуынса, әгәр элек йыл һайын бирелә торған аҡсалата түләү ай һайын бүленеп түләнһә, 2014 йылдан алып билдәләнгән түләү, ағымдағы йылдың 1 апреленән ҡалмайынса, йылына бер тапҡыр биреләсәк. 2014 йылдың 1 ғинуарынан алып был түләүҙең күләме индексацияланған һәм 11 728 һум (2013 йылда - 11 138 һум) тәшкил итә.

# ПЕНСИЯ ЙӘШЕ АРТТЫРЫЛМАЙ



**Рәсәйҙә пенсия йәшен арттырыу ҡулайлы түгел, тип иҫәпләй илдең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Максим Топилин.**

- Пенсияға сығыуҙың иң юғары йәше, ҡағиҙә булараҡ, ғүмер оҙайлығы 75-80 йыл тәшкил иткән илдәрҙә ҡаралған. Рәсәйҙә ғүмер оҙайлығы әлегә юғары уҡ түгел: 2012 йылда был күрһәткес 70 йәш тәшкил итте, 2018 йылға күҙаллауҙар буйынса - 74 йәш. Тимәк, пенсия йәшен арттырыу Рәсәйҙә ҡулайлы түгел, - тип белдерҙе "РИА Новости"ға интервьюла министр.

Рәсәй Хеҙмәт министрлығы сайтында хәбәр ителеүенсә, РФ пенсия системаһын үҫтереү оҙайлы срокле стратегия нигеҙендә эшләнгән, декабрҙә ҡабул ителгән закондарҙа пенсия йәшен арттырыу ҡаралмаған.

- Бынан тыш, яңы пенсия формулаһы дөйөм ҡабул ителгән пенсия йәше сигендә лә хеҙмәт итеү хоҡуғын күҙ уңында тота. Мөһим, был осраҡта пенсия күберәк буласаҡ: пенсия йәше етеп, биш йыл үткәндән һуң пенсия тәғәйенләүгә мөрәжәғәт иткән осраҡта билдәләнгән түләү 36 процентҡа, страховка пенсияһы - 45 процентҡа, йәғни бер ярым тапҡырға тиерлек артасаҡ,- тип аңлатты Максим Топилин.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр сентябрь-ноябрҙә уртаса иҡтисади әүҙем халыҡ иҫәбе 2 013,9 мең кеше тәшкил итте. Октябрҙә уртаса эш хаҡы 22470,4 һум тәшкил итте, тип хәбәр иттеләр республика Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

**Галина БАХШИЕВА.**

# ЯЛ ИТЕҮ КҮБЕРӘК ТҮГЕЛМЕ?



**2014 йылда рәсәйлеләр 118 көн ял итәсәк, ә Башҡортостан халҡын, мосолман байрамдары булғанлыҡтан, өҫтәмә өс ял көнө көтә.**

Башҡортостан Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, Ураҙа байрамы, Ҡорбан ғәйете һәм Республика көнөн байрам итеүгә бәйле 28 июль, 4 һәм 11 октябрь эшләмәгән байрам көндәре тип иғлан ителгән.

2014 йылда рәсәйлеләрҙе дүрт көнлөк өс уик-энд - майҙа, июнДә һәм ноябрҙә көтә, тип алдан хәбәр ителгәйне. Яҙ һәм хеҙмәт байрамына бәйле ял көндәре 1 майҙан 4-нә тиклем күҙаллана. 12 июндән 15-нә тиклем ил халҡы Рәсәй көнөн билдәләйәсәк, ә 1 ноябрҙән 4-нә тиклем - Халыҡтар берҙәмлеге көнө. 4 һәм 5 ғинуар (шәмбе һәм йәкшәмбе) ял көндәре эшләмәгән байрам көндәренә тура килеү сәбәпле, 2 майға һәм 13 июнгә күсерелә. Шулай уҡ 23 февраль (йәкшәмбе) ял көнөнә тура килә, шуға күрә артыҡ ял көнө рәсәйлеләргә 3 ноябрҙә биреләсәк.

Мартта күсереүҙәр булмаясаҡ. Рәсәйлеләр өс көн рәттән ял итәсәк - 8 марттан алып 10-на тиклем. Еңеү көнөнә бәйле майҙа ял көндәре күсерелмәйәсәк, ял көндәре 9 майҙан 11-нә тиклем һуҙыласаҡ, тип белдерҙеләр Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

# БАЛДЫ ЛА - БАГАЖҒА

**Бөтә аэропорттарға ебәрелгән директиваға ярашлы, һауа судноларында биҙәнеү әйберҙәре, медикаменттар, аэрозолдәр, төрлө һыйышлыҡтарҙа шыйыҡсалар һәм гелдәр йөрөтөү тыйыла. Улар бөтәһе лә багажға тапшырылырға тейеш, тип хәбәр итә Рәсәй авиацияһы.**

- Башҡорт балы шулай уҡ шыйыҡсалар категорияһына инә, шуға күрә уны ҡул йөгөндә алып барырға ярамай, - тип аңлаттылар Өфө аэропортында.

Пассажирға осоу барышында кәрәк булыр медикаменттарҙы, шулай уҡ гигиена кәрәк-ярағын, авиация имենлеге хеҙмәте менән тикшереү һәм осоу алды тикшереү процедураларын үткәндән һуң, ҡул йөгөндә алып барырға була, тип хәбәр иттеләр аэропорттың матбуғат хеҙмәтенән.

Тулыраҡ мәғлүмәтте (347) 229-52-95 телефоны аша, пассажирҙарҙы теркәү өҫтәлдәрендә һәм тикшереү пункттарында алырға була.

**"Башинформ".**

---

Ҡаланы был хәлдән ҡотолдорор сараны шул уҡ Тәбиғәт ғәли йәнәптәре үҙе үк беҙгә күрһәтте бит.

Яңы йылдан һуңғы бер аҙна буйы тиерлек нимәгә шаһит булдыҡ, әйе, һауа температураһы юғары күтәрелеп, көндәр йылынып китте. Тәбиғәт быны менән беҙгә нимә әйтергә теләне? Әйе, тап шул ваҡытта, йәғни 1 градус ҡына йылылыҡта ярты йыл самаһы яуған ҡар эреп юҡҡа сыға яҙҙы. Беҙ тәбиғәтте был осраҡта әрләгән булдыҡ, ә бит уға рәхмәт әйтеп, ошонан үҙебеҙгә фәһем, өлгө алырға кәрәк таһа. Мәҫәлән, ҡала райондарында махсус хеҙмәттәр булдырып, ҡала урамына йыйылған ҡарҙы бер урынға ташып, эсенә минитракторҙар рәүешендәге мейестәр индереп, ҡарҙы иретеп була бит.

Бының өсөн ҙур сығымдар ҙа талап ителмәйҙер. Сананды йәй әҙерлә, тигәндәй, бындай "домналарҙы" йәй көнө үк эшләп ҡуйырға була.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ҡар эрей башлаһын өсөн 1 градус йылылыҡ та етә. Уның ҡарауы, тап ошо юл менән беҙ баш ҡалабыҙ урамындағы тығындарҙан һәм башҡа күңелһеҙ хәлдәрҙән ҡотолор инек.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

---

ҮӘТ ӘЙ!

# ЭСКЕЛЕКТӘН...

## дин генә аралай алалыр

**"Хөрмәтле редакция! Һеҙгә бик ҙур үтенесебеҙ бар. Беҙҙең ғаиләгә оло афәт килде - улыбыҙ эскегә һабышты. Уны ҡайҙа ғына, нисек кенә дауалап ҡараманыҡ. Тик барыһы ла һөҙөмтәһеҙ. Минең таныштарым "Нәсихәт" реабилитациялау үҙәге тураһында һөйләне. Уларҙың туғандарының улын шул үҙәктә дин аша айыҡ тормошҡа ҡайтарғандар икән. Егет хәҙер бөтөнләй эсмәй, хаҡ мосолман юлында, өйләнгән. Тик беҙ "Нәсихәт" үҙәгенең адресын таба алманыҡ. Зинһар, ярҙам итегеҙ!" Баймаҡ ҡалаһынан Әнисә исемле уҡыусыбыҙҙан ошондай хат алғас, Өфө тарафтарына шылтыраттыҡ.**

Эйе, Өфө ҡалаһында 2009 йылда асылған "Нәсихәт" реабилитациялау үҙәге ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 200-ҙән ашыу кешегә алама ғәҙәттәрен ташларға ярҙам иткән. Был хаҡта республика матбуғатында күп яҙҙылар, һөйләнеләр, күрһәттеләр. Үҙәктә эскелеккә һабышҡан кешеләрҙе һәм наркомандарҙы ислам дине аша дауаланылар. Хәмерһеҙ йәшәй алмағандар - ярты йыл, ә энә ҡолдары бер йыл ислам дине нескәлектәрен өйрәнеп, үҙҙәре өҫтөндә эш алып барған. Дәрестәр 18 сәғәт дауам иткән. Буш ваҡыттарын үҙәк тәрбиәләнеүселәре баҡсала үткәргән. Унда улар үҙ көстәре менән йәшелсә, емеш-еләк үҫтергән. Үҙәктә дауаланыу курсын үткәндән һуң, күптәр кире ғаиләләренә ҡайтып, тулы тормош менән йәшәй башлаған. Реабилитация курстарын үтеүселәрҙең күбеһе артабан дини юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән.

Ни өсөн барыһын да үткән заманда яҙабыҙ һуң? Сөнки "Нәсихәт" реабилитациялау үҙәгенә шылтыратып, күңелһеҙ хәбәр ишеттек. Үкенескә ҡаршы, эскеселәрҙе, наркомандарҙы бушлай дауалаған үҙәк ябылған. Сөнки уларҙың үҙҙәренең изге эшен алып барыу өсөн бинаһы юҡ. Ә был эште ойоштороп йөрөүсе дин әһеле Нурмөхәмәт Нуриев бөтөнләй республиканан ситкә сығып киткән, тинеләр. Был хаҡта ишеткәс, күңел тетрәнде. Иғтибар итһәгеҙ, хәҙер илебеҙҙең һәр төбәгендә сиркәүҙәр янында эскеселәргә һәм наркомандарға ярҙам иткән үҙәктәр эшләй. Ә беҙ республикала кешеләргә өмөт бүләк иткән, ысынлап та ярҙам иткән берҙән-бер мосолман үҙәген һаҡлай алмағанбыҙ. Ҡайҙа һуң шәфҡәтлелек акциялары үткәргән беҙҙең зыялы, бай кешеләр? Бәлки, үҙ иркең менән биргән аҡсаны кәйеф-сафалы кисәләр, шоуҙар өсөн түгел, ә халҡына ярҙам иткән үҙәктәр өсөн тотонорға кәрәктер? Ғөмүмән, "Нәсихәт" реабилитациялау үҙәген яңынан асыу өсөн бар Башҡортостан күтәрелеп сығырға тейештер. Сөнки, тәү сиратта, ерле халыҡты дауалаған үҙәк беҙҙең йәшәйешебеҙ өсөн бик тә мөһим.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА әҙерләне.**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бабасыр

❖ 8 грамм ҡыҙылбаш (кровохлебка) тамырын 1 стакан һыуға һалып, талғын утта 10 минут ҡайнатырға. Көнөнә 1 мәртәбә 100 мл эсергә.

❖ 100 грамм кишер һәм сөгөлдөр һутына 100 грамм коньяк ҡушырға. Ашарҙан 30 минут алда көнөнә 3 мәртәбә 100-әр мл эсергә.

### Ҡан баҫымы

❖ Сөгөлдөр һутын шул уҡ күләмдәге бал менән ҡушып, көнөнә 3-4 мәртәбә яртышар стакан эсергә. Дауаны 3 ай дауам итергә кәрәк.

### Сәй содаһы

❖ 1 стакан һыуға 1 семтем сәй содаһы, лимон һуты ҡушып эсәһең, ашҡаҙандың әселеге кәмей. Был сара газдан бушандыра, эс китеүен бөтөрә, ә содалы ванна ҡан әйләнешен яҡшырта, тирене йомшарта.

### Тын алыу юлдары сирҙәре

❖ 10 баш һуғанды, 1 һарымһаҡты ваҡлап турарға, 1 литр ҡайнар һөттә 2-3 минут ҡайнатырға, бер аҙ бөтнөк һыуы һәм 1-2 ҡалаҡ бал өҫтәргә.

### Тоҙ

❖ Ҡайһы берҙә мунсанан һуң хәл бөтә, сөнки тир менән бергә организмдағы тоҙ сыға. Шуға күрә мунсаға инер алдынан бер киҫәк тоҙло балыҡ, йәки тоҙло ҡыяр ашарға кәрәк.

### Гөлйемеш тамыры

❖ Гөлйемеш тамырынан яһалған төнәтмә бөйөрҙәге таштарҙы иретергә ярҙам итә. 2 ҡалаҡ ваҡланған тамырға 200 мл ҡайнаған һыу һалып, 15 минут ҡайнатырға. Төнәтеп, һөҙөргә. 7-10 көн дауамында көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Һүҙлек һәр кемгә аңлайышлы итеп төҙөлөүе менән иғтибарҙы йәлеп итә. Һүҙҙәр һәм уларҙың мәғәнәһе урыҫ теленә тәржемә ителгән. Бынан тыш, уларҙың инглиз һәм төрөк телдәрендә лә тәржемәһе бирелә.*



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ен-зәхмәт, пәрей менән бәйле ауырыуҙар

**Зәхмәт эйәләшеү.** Кешегә зәхмәт эйәләшә, тиҙәр. Ул уны төндә йоҡлатмай, һаташтыра икән. Ҡатын кешегә ир булып күренә, ир кешегә ҡатын булып килә.

**Зәхмәт һуғылыу.** "Зәхмәт һуғылған тигәндәр, өшкөргәндәр, зәхмәт доғалары уҡығандар. Таң һыуы алып эсергәндәр. Кис тышҡа сыҡтыҡ. Аҙбар алдында ҡолағым сыңлап ауырта башланы. Өйгә керҙек, йоҡларға ятҡансы шешеп сыҡты. Имсе өшкөрҙө лә, минең шеш тишелеп, ҡан ҡатыш эренләп ағып китте. Зәхмәт һуғыу шулай була икән..." - тип һөйләне Ҡариҙел районынан С. Хөсәйенова.

**Ике юл сатына.** "Ҡояш байыр алдынан ҡапҡа янында йығылдым. Имсе әбей зәхмәт китһен тип, күлдәк иҙеүен йыртып, ике юл сатына алып барып ҡалдырып китте", - тип яҙҙырҙы Ҡариҙел районының Бағаҙы ауылынан Т.Шәрифйәнова.

**Пәрей һуғыуҙан им.** 1. Пәрей һуҡҡанда өйҙә сыбыртҡы, ҡамсы шартлатып, им-том итҡәндәр. Ҡамсы менән тәрлә урынға шарт-шорт: "Осоҡ-осоҡ, пәрейҙәр осоп китһен", - тип һуҡҡылағандар. Һуйған тауыҡты берәй әбейгә биргәндәр. Сарпыулы кеше - енле, ен, йоморҡа, тоҙ, сәй, көл, күмер, ҡаҙаҡ алып, сарпыу, тип баш-күҙҙән, билдән әйләндереп, шаршамбы көн ташлайҙар. Ташлағанда: "Кәйҙән килдең, шунда кит", - тиҙәр. Уны ҡояш байығанда артың менән, кешегә ҡарамай, ҡырға ҡаратып ташлайһың, ҡайтҡанда бер кем менән дә һөйләшмәҫкә кәрәк, тип өйрәтә ололар.

2. Кеше сарпыулап, оҙаҡ ауырыһа, кейемен ҡара тауыҡ ҡанына буяп, шуны бер аулаҡ ергә күмеп имләгәндәр.

### Ер зәхмәтен имләү

**Ергә көл һалыу.** Ҡояш байығас, ергә зәхмәт ята. Шул ваҡыт йығылһаң, зәхмәтә ҡағыла. Уның сирен бер дауа менән лә алдырып булмай. Кеше сирләмәһен өсөн шул урынға "бес" итеп, көл һалалар. Ошо ваҡыт әпсен әйтәләр:

*Ер анаһы ерән һаҡал,*
*Һыу анаһы көрән һаҡал,*
*Мине тотма, быны тот!*

Шунан шым ғына алға китергә кәрәк, боролорға ярамай. Бер аҙ ул арттан ҡыштырлап-ҡыштырлап килә, тиҙәр, ҡайтып еткәнсе һөйләшмәҫкә, хатта тамаҡ та ҡырмаҫҡа кәрәк. Ергә көл һалғанда, "Бисмилла" тип әйтергә ярамай! Югинә. сир үзенә йоға.

**Ете төрлө ем.** Берәй кешегә зәхмәт ҡағылды, ти. Ул имсегә килә. Ләкин имсе имләргә теләп бармай. Сөнки зәхмәт уға күсә, ти. Шуға имсе ете төрлө нәмәнән ем йыя. Унда тырнаҡ, сәс, көл, күмер, тотонолмаған энә, терегөмөш, бер тин аҡса була. Имсе шуларҙың бөтәһен бер төйөнсөккә йыя. Шунан әлеге төйөнсөктө ауырыу тирәләй уҙан һулға әйләндерә. Әйләндергәндә шулай тип һамаҡлай:

*Ер инәһе ерән һаҡал,*
*Һыу инәһе һыуыған һаҡал,*
*Ерҙән тейһәң, ергә кит!*
*Елдән тейһәң, елгә кит!*
*Быны һиңә яулыҡ,*
*Сәлимәгә бир һаулыҡ!*

Һамаҡ өс мәртәбә ҡабатлана (кем ауырыһа, шуның исеме әйтелә). Имсе шулай ти ҙә имде ергә һалырға сығып китә. Ауырыуға зәхмәт ҡайҙа ҡағылған, ул уны шунда һалырға тейеш. Шуны ергә һалыу, тиҙәр.

Ергә һалырға барғанда ла, ҡайтҡанда ла артҡа ҡарарға ярамай. Кеше осрап өндәшһә лә, туҡтамаҫҡа, уға яуап бирмәҫкә, өндәшмәҫкә.

Артҡа ҡараһаң, туктап өндәшһәң, ауырыу кире ҡайта, ти.

**Эт йөнө менән ыҫлау.** Сарпыу (сарфыу) һуғылып ауырыған ир баланы кәнтәй эттең, ҡыҙ баланы арлан эттең йөнө менән ыҫлайҙар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...

**Телебеҙ яҙмышы һәр ваҡытта ла иң актуаль мәсьәләләрҙең береһе булды. Телде һаҡлауҙың, уның ҡулланыу даирәһен киңәйтеүҙең, пропагандалауҙың юлдары, әлбиттә, төрлө. Кемдер, мәҫәлән, телебеҙҙең байлығы, матурлығы тураһында шиғыр яҙа, икенселәр телдең фәнни нигеҙҙәрен өйрәнеп, башҡаларға еткерә, өсөнсөләр балалар күңелендә телгә һөйөү тәрбиәләй, башҡортса һөйләшергә, фекерләргә өйрәтә. Телебеҙҙе һаҡлауҙың, яҡлауҙың бөтә алымдары ла кәрәкле һәм мөһим.**

# АКАДЕМИК ҺҮҘЛЕК МЕНӘН...

## һәр кем маҡтана алмай




Ҡулымда - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре, ошо институттың директоры, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова мөхәррирлегендә сыҡҡан "Башҡорт теленең академик һүҙлеге"нең беренсе томы. Ул "А" хәрефенән башланған һүҙҙәрҙе үҙ эсенә алған. Унда башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларынан алып бөгөн ҡулланылышта булған һөйләү һәм китап телмәренә, әҙәби телгә һәм диалект һөйләштәренә ҡараған башҡорт теленең бөтә лексикаһы тулы сағылдырылған.

Һүҙлек һәр кемгә аңлайышлы итеп төҙөлөүе менән иғтибарҙы йәлеп итә. Заман талабына, ике теллелек шарттарына ярашлы, һүҙҙәр һәм уларҙың мәғәнәһе урыҫ теленә тәржемә ителгән. Бынан тыш, уларҙың инглиз һәм төрөк телдәрендә лә тәржемәһе бирелә. Был йәһәттән һүҙлек киң ҡатлам уҡыусыларының да, фәнни-филологик ихтыяждарҙы ла ҡәнәғәтләндерә ала. Һәр һүҙҙең телдәге йәшәйеше, ҡулланылышы, мәғәнәһе буйынса мыҫалдар килтерелә. Һүҙгә грамматик яҡтан ғына характеристика бирелмәй, ә һүҙъяһалышы, уның ҡулланылышы үҙенсәлеге аңлатыла.

Тағы ла шуныһы менән иғтибарҙы йәлеп итә ул: һүҙлектә һүҙҙәрҙән тыш ныҡынған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләре тулы аңлатыла, тәржемәләре бирелә. Мәҫәлән, "ауыҙ асыу" һүҙбәйләнешенең төрлө мәғәнәләрен табырға була унда:

а) һөйләшә башлау, һөйләй башлау - заговорить, раскрыть рот;

б) ниҙелер эшләй алмайынса буш ҡалыу, проморгать;

в) аптырап ҡарап тороу; аңшайыу, таң ҡалыу - разинуть рот;

г) йыртылыу (аяҡ кейеме тураһында) - изодраться. Миҫал: Бер туфлийы ауыҙын асҡан;

д) ураҙа ваҡытында кис ашар алдынан тоҙ йәки емеш ҡабып ауыҙ асыу - во время поста вечером перед едой брать в рот соль или сухофрукты.

Билдәле булыуынса, сәнәғәттең, халыҡ хужалығының, бигерәк тә мәҙәниәттең, фәндең етеҙ үҫеше, йәмғиәттәге ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә һуңғы ике тиҫтә йыл араһында башҡорт теле лексикаһы һиҙелерлек үҙгәреш тәр кисерҙе. Ҡулланылышҡа яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр инде, күп төшөнсәләр иҫкергән һүҙҙәр рәтенә күсте, элекке һүҙҙәр янынан ҡулланыла башланы. Быларҙың бөтәһе лә, билдәле инде, башҡорт теленең лексик системаһының үҫешенә булышлыҡ итте һәм кәрәкле баҫмаларҙа уны яңыртыу зарурлығын тыуҙырҙы. Был йәһәттән әлеге һүҙлек авторҙары баһалап бөткөһөҙ эш үтәп сыҡҡан. Башҡорт теленең бөтә нескәлектәрен өйрәнгән, тойған, белгән һөнәрмәндәр генә шундай ғәйәт ҙур эшкә һәләтле.

"Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы" Башҡарма комитеты Советының Стәрлетамаҡта үткән күсмә ултырышында Башҡарма комитет рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Румил Аҙнабаев, "Башҡорт теленең академик һүҙлеге"н сығарыуға үҙ өлөшөн индергән һәр хеҙмәткәрҙең түшендә Салауат Юлаев ордены булырға тейеш, тигән һүҙҙәрҙе әйткәйне. Ысынлап та, автор-төҙөүселәр - филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова, филология фәндәре кандидаты, өлкән ғилми хеҙмәткәр Нәсимә Суфиянова, кесе ғилми хеҙмәткәрҙәр Рәмилә Кәримова, Алһыу Ишеғолова башҡорт теленең лексикаһын системаға һалыу, аңлатыу, урыҫ теленә, ә баш һүҙҙәрҙе урыҫ, инглиз, төрөк телдәренә тәржемә итеү, башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтендә мөһим урын тотҡан айырым лексик күренештәрҙең этномәҙәни мәғәнәһен асып биреү, башҡорт теленең лексик байлығын мөмкин тиклем тулыраҡ күҙ алдына баҫтырыу йәһәтенән тос хеҙмәт башҡарған. Рәсәйҙә шундай академик һүҙлеге булған икенсе субъект булыуыбыҙ менән ғорурлана алабыҙ.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# БЕР-БЕРЕБЕҘҘЕ АҢЛАЙБЫҘМЫ?

**"Һин мине аңламайһың, мине бер кем дә аңламай", тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Нимә һуң ул аңлау? Аңлау кешенең аҡыл кимәленән торамы? Бөгөн ошолар тураһында һөйләшеп алайыҡ.**

Аңлау, тимәк, мәғлүмәтте ҡабул итеп, эшкәртеп һаҡлау һәм ҡулланыу.

Беренсенән, аңлар өсөн мәғлүмәтте ҡабул итеп ала белергә тейешбеҙ. Тышҡы донъя тураһында мәғлүмәтте рецепторҙар биреп тора: беҙ ишетәбеҙ, күрәбеҙ. Ләкин төрлө кешенең күреү, ишетеү һәләте төрлөсә.

Беҙ йыш ҡына, уйлау шундай ябай эш, тип иҫәпләйбеҙ, нимә тураһында, нисек уйлауыбыҙға әһәмиәт тә бирмәйбеҙ. Рәссам тау башынан таштар йыйып, витраж ижад иткән һымаҡ, беҙ үҙебеҙҙең эске донъябыҙҙа тышҡы донъяның һүрәтен эшләйбеҙ. Бер рәсем дә, хатта фотография ла ысынбарлыҡҡа тап килмәгән кеүек, беҙҙең эске донъябыҙ ҙа тышҡы донъянан айырыла. Беҙ тыштан килгән мәғлүмәтте һайлап ҡына файҙаланабыҙ, уларҙы күп фильтрҙар аша үткәрәбеҙ.

Беренсе фильтр - репрезентатив (яңынан күҙ алдына килтереү) системаһы.

**Психологик практикум.**

**- Йәйге урманды хәтергә төшөрөгөҙ.** Иғтибар итегеҙ, һеҙ ниндәй күренештәрҙе иҫкә төшөрҙөгөҙ? Урманды, япраҡ төҫөн, сәскә матурлығын күҙ алдына килтерҙегеҙме, әллә урман шаулауын, ҡоштар һайрауын ғына ишетәгеҙме?

**- Шиғырҙы яттан һөйләгәндә һеҙ уны ишетәһегеҙме әллә текст яҙылған китап битен, хәрефтәрҙе генә күрәһегеҙме?**

Әгәр ҙә һеҙ беренсе сиратта ишетәһегеҙ икән - һеҙ аудиал, икенсе төрлө әйткәндә, яңынан күҙ алдына килтереү өсөн һеҙ күбеһенсә тауыш ҡулланаһығыҙ.

Әгәр ҙә беренсе сиратта күрәһегеҙ икән - һеҙ визуал, яңынан күҙ алдына килтереү өсөн һеҙ һүрәтте ҡулланаһығыҙ.

Аудиал кеше күргәндәрен енел генә аңлап бармай, иҫендә ҡалдырмай, уға геометрия, черчение фәндәре ауыр бирелә, әммә әллә ҡасан ишетеп ҡалған көйҙө, йырҙы, тауыштарҙы мәңге онотмай.

Визуал, киреһенсә, әйткәнде ҡолағына ла элмәй, аңлатаһың-аңлатаһың, ул барыбер төшөнә алмай, үҙ күҙҙәре менән күргәс кенә аңлай, ышана башлай. Дөйөм алғанда, донъяла визуалдар күберәк була.

**Кәңәш:**

**Балағыҙ, туғаныңыҙ визуал икән, уға икенсе бүлмәнән, йәки телефондан нимәлер әйтеп маташмағыҙ, был файҙаһыҙ. Ул ишетә, "Эйе, эйе", тип яуаплай һәм шунда уҡ әйткәнегеҙҙе онота. Шуға күрә, аңлаһын, хәтерендә**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ОЛО ИҘЕЛ ДАЛАЛАРЫ БАШҠОРТТАРЫ



### Һамар башҡорттарының Башҡортостанға күсенеүе

Советтар Союзының күп төбәктәрендә 20-се йылдар башында күҙәтелгән ҡоролоҡ Һамарҙы ла урап үтмәй. Уңыштың тиҙ ҡороп бөтөүе, мал аҫырауға бесән булмауы, ауыр иҡтисади хәл кешеләрҙең күпләп үлеменә килтерә. Башҡорт ауылдарында ла ҡурҡыныс хәл күҙәтелә. Мәрхүмдәрҙе ерләү мөмкинлеге булмай, кеше ашау осраҡтары теркәлә башлай. Ҡайһы бер ауылдар бөтөү сигенә етә. Күҙәбай олоҫо ревкомы рәйесе: "Күҙәбай олоҫонда халыҡһыҙ буш территория ғына ҡаласаҡ көн алыҫ түгел", - тип яҙа. Аслыҡтан ҡасып, Имел һәм Күҙәбәй олоҫтарында йәшәгән башҡорттар күпләп күсенә башлай. Күпләп күсенеү 1920 йылда башлана. Төбәктән халыҡ төркөмләп йәки берәмләп китә. Кемдәрҙер - Башҡортостанға, икенселәр - Ҡаҙағстанға, өсөнсөләр Урта Азияға юл тота. Ләкин бик күптәр тап ошо юлда үлемен таба.

Һамар башҡорттары күсенгән урындарҙың береһе Башҡортостандың Бөрйән-Түңгәүер (1922 йылдан Йылайыр) кантоны була. 1920 йылда Күҙәбай ауылы йыйылышы ҡарары менән Башҡортостанға Ғайсар Ирназаров һәм Ильяс Латыпов тигән кешеләр ебәрелә. Улар Үҫәргән кантонында украиндарҙан 10-12 йорт һатып ала һәм яҡташтары ошо ауылға күсенеп килә. Был ауыл Ғайсар исемен йөрөтә башлай. Шулай итеп, бер нисә тораҡ пунктына нигеҙ һалына. Ләкин былай ҙа аслыҡтан йонсоған Урал аръяғы кантондарында йәшәгән башҡорттар Волга буйынан күсенеп килгән милләттәштәрен күреүгә артыҡ шат булмай. Һамар башҡорттарына улар килмешәк тип ҡарай, ярҙам ҡулы һуҙырға ашыҡмай. Ғайсар ауылына күсенеп килеүселәрҙең дә бер өлөшө күпмелер ваҡыт йәшәгәндән һуң ҡабаттан күсенеп китергә мәжбүр була.

Аслыҡ осоро үтеп, тормош бер аҙ яйға һалынғас, Һамар башҡорттарын Башҡортостанға күсереү мәсьәләһе ҡабаттан ҡалҡып сыға. 1924 йылда Һамар губернаһы эшсе-крәҫтиән депутаттарының Күҙәбәй олоҫ съезы үтә. Унда ҡатнашыусылар "...мы граждане-башкиры Кузябаевской волости Пугачевского уезда Самарской губернии, в целях нового приобщения с родным башкирским населением, от которого мы оторвались в силу пагубной политики обрусения нас со стороны старого монархического черносотенного царского правительства и в целях совместного культурного, экономического и советского строительства решили переселиться на территорию Автономной Башкирской Социалистической Советской Республики" тигән ҡарар ҡабул итеп, ошо олоҫта йәшәгән башҡорттар үҙҙәренең милләттәштәре янына, Башҡортостан автономияһына, күсенеү теләген белдерә. Төп этәргес - милләтте һаҡлау була, сөнки башҡа халыҡтар тарафынан ассимиляцияланыу ҡурҡынысы был мәлгә ныҡ арта. Әлбиттә, өйәҙҙә йәшәгән башҡорттарҙың фәҡир хәлдә булыуын иҫәптә тотоп, улар дәүләт тарафынан бушлай күсендереүҙе, йорттар һалыу өсөн бушлай ағас биреүҙе, оҙайлы кредит, ауыл хужалығында кәрәкле ҡорамалдарҙы, техниканы льготалы нигеҙҙә һатып алыуҙы, шулай уҡ 10 дисәтинәнән дә кәмерәк булмаған һөрөнтө ер биреүҙе лә һорайҙар.

1925-1926 йылдарҙа киләһе биш йылда күсенеү саралары буйынса план төҙөлә. 1927 йылда Башсовнаркомдың йыйылышында перспектив план раҫлана. Уның бер пунктында күскенселәрҙең контингентын милли үҙенсәлек буйынса һайларға, тип тә билдәләнә. Ләкин был пункт Мәскәүҙә урынлашҡан Бөтә Союз Күсенеү комитетына оҡшап етмәй. Улар яғынан Һамар башҡорттарының инициативаһын аңламау күҙәтелә. Мәскәүҙән "Комитет полагает, что было бы ошибкой при землеустройстве и размещении населения по территории руководствоваться исключительно национальными признаками", тигән яуап килә. Улар юридик нормаларҙың тулыһынса эшләнеп бөтмәүенә лә һылтана. Ысынында иһә, был Бөтә Союз Күсенеү комитетының ҡарары рус булмаған милләттең ҡушылыуына, берләшеүенә ҡамасаулаған шовинизмдың бер сағылышы була. Сөнки Һамар башҡорттарының инициативаһы, СССР Конституцияһында иғлан ителгән милли үҙбилдәләнеш идеяһына таянып, халыҡтың төп өлөшө йәшәгән төбәккә ҡайтып, милли булмышты, мәҙәниәтте һаҡлап ҡалырға тырышыуға нигеҙләнә.

Шулай ҙ, халыҡ яҙмышына, уның киләсәгенә битараф булмаған кешеләрҙең эшмәкәрлеге төрлө кәртәләргә ҡарағанда көслөрәк булып сыға. Ғөбәй Дәүләтшин менән Зәбих Исламғазин кеүек билдәле шәхестәр тырышлығы менән Һамар губернаһынан күсеп килгән башҡорттар 1928 йылда Урғаҙа йылғаһы буйында төбәкләнә. 1933 йылда Дәүләтшиндың Йылайыр орлоҡ совхозына сәйәси бүлек мөдире вазифаһына тәғәйенләнеп, күсеп килеүе, бәлки, үҙенең яҡташтарына яңы тормош шарттарына яраҡлашырға ярҙам итеү өсөн дә эшләнгән булғандыр. Орлоҡ совхозының ижтимағи-сәйәси тормошонда Һамар губернаһынан күсенеп килгән башҡорттарҙың күпләп ҡатнашыуын да билдәләргә кәрәк.

Шулай итеп, әгәр 1920-1921 йылдарҙа халыҡтың күсенеүе күп осраҡта үҙенән-үҙе килеп сыҡһа, 20-се йылдарҙың икенсе яртыһында күсендереү планлы рәүештә алып барыла. Башҡорт хөкүмәте Һамар башҡорттарын күсенеп киләсәк урындары менән таныштыра, ерҙәр әҙерләнә, дотациялар һәм льготалар ҡарала. Эш систематик рәүештә атҡарыла. Волга далаларында йәшәгән милләттәштәребеҙҙең бер өлөшө административ Башҡортостанға күсерелә. Һамар губернаһынан башҡорттарҙы күсереү сәйәсәте үҙен аҡлай, тип һанарға була. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышы Ырғыҙ һәм Кәмәлек далалары башҡорттарын ҡабул итә. Күскенселәр үҙҙәрен ассимиляциянан һаҡлап алып ҡала һәм Башҡортостандың үҫешенә лә үҙ өлөштәрен индерә.

2010 йылғы халыҡтың иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгө көндә Һамар өлкәһендә 7,3 мең тирәһе, Һарытау өлкәһендә 3,5 мең башҡорт йәшәй.

**Марсель МАНАПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Аҙағы. Башы 1-2-се һандарҙа).**

---

**ҡалдырһын өсөн уға һүрәт күрһәтергә, йә булмаһа, әйтә торған һүҙегеҙҙе яҙып биреү яҡшыраҡ булыр.**

Һәр мәғлүмәтте фильтрҙар аша үткәрәбеҙ, тип әйткәйнек инде. Икенсе фильтр - ул беҙҙең үткәндәр.

Йылдар үтә, беҙ тәжрибә туплайбыҙ һәм һәр яңылыҡты хәтер янсығында булған мәғлүмәт менән сағыштырабыҙ. Баланың хәтерендә уҡытыусы һөйләгән берәй нәмә, мәҫәлән, жираф тураһында мәғлүмәт булһа: "Мин жирафты беләм, уны ағайымдың китабында күрҙем", - тиәсәк. Ниндәйҙер оҡшашлыҡ тапһа: "Аңланым, Ер шары атайым алып биргән футбол тубына оҡшаған", - тип шатланасаҡ. Ә бына ул күрмәгән, ишетмәгән нәмә тураһында аңлатып биреү өсөн үҙе бер оҫталыҡ талап ителә.

**Кәңәш:**

**Әңгәмә ҡорасаҡ кешегеҙҙең тормош тәжрибәһе, белеме тураһында алдан уҡ мәғлүмәт алһағыҙ, һөйләшеү нәтижәлерәк булыр. Бала менән бала телендә һәм бабай менән бабай телендә һөйләшергә тырышығыҙ. Һәр профессияның да үҙенә хас терминдары булғанын онотмағыҙ.**

Әйткәндәй, конфликттарҙың иң йыш сәбәбе - бер-береңде дөрөҫ аңламау. Бөтөнләй аңламау яңылыш аңлауҙан һәйбәтерәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн беҙ аңлауҙың ике шарты, фильтры тураһында һөйләштек һәм әлегә әңгәмәне тамамлап торайыҡ, сөнки бер юлы күп мәғлүмәт бирелһә, информацион стресс булыуы мөмкин. Информацион стресс тураһында икенсе осрашыуыбыҙҙа һөйләшербеҙ.**

**Бер-берегеҙҙе аңларға тырышығыҙ, бәхетле булығыҙ.**

**Суфия МӨХӘМӘТРӘХИМОВА,**
**психология фәндәре кандидаты.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Сәкмән кеүек үк, **елән** дә оҙон һәм киң, тик ул бер ҡасан да билбау менән быуылмай, төймә лә тағылмай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың еләне бәрхәт йәки буҫтау туҡыманан, ирҙәрҙеке - ҡытай тауарынан йәки Урта Азиянан килтерелгән ярым ебәк тауарҙан - әҙрәстән тегелгән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың еләне ғәҙәттә матур итеп биҙәлгән. **Камзул** һәм **бишмәт** тип йөрөтөлгән өҫ кейемдәре фабрикала етештерелгән кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән, уларҙың эске ҡатламы ла булған. Биле тотолған, төймә менән ҡаптырып ҡуйылған. Камзул ҡыҫҡағыраҡ, тубыҡтан өҫтәрәк, уның еңдәре юҡ. Ул бишмәт өҫтөнән кейелгән. Бишмәттең иһә еңдәре бар, оҙонлоғо - тубыҡтан аҫҡа төшөп тора.

**Ҡамсат** һәм **ҡама бүрек** ҡондоҙ һәм ҡама тиреһен ҡулланып тегелгән. Был баш кейеме элегерәк, бәлки, нығыраҡ таралған булғандыр, әммә XX быуат башында уны Көньяҡ Урал башҡорттары ғына кейгән. Оло әбейҙәр таҫтар өҫтөнән ҡама бүрек кейгән. Бигерәк тә ҡатайҙарҙа, ҡара-барын-табындарҙа, күбәләк-тиләүҙәрҙә, тамъян-түңгәүерҙәрҙә, әйлеләрҙә, һирәкләп меңлеләрҙә һәм бөрйән башҡорттарында ҡама бүрек киң таралған.

Башҡорттарҙа ойоҡ өс төрлө булған: йөндән бәйләнгән **бәйләм ойоҡ, тула ойоҡ** һәм **кейеҙ ойоҡ** (һүрәт, тула ойоҡ). Кейеҙ ойоҡто ир-егеттәр генә кейгән. Табаны ла, өҫкө өлөшө лә тиренән, ә ҡуңысы туланан тегелгән иң ябай аяҡ кейеме **сарыҡ** тип атала. Уның ҡуңысы тубыҡҡа тиклем етеп тора. Ҡатын-ҡыҙҙар сарығының артҡы өлөшө ҡыҙыл төҫтәге буҫтау менән биҙәкләнә (һүрәт). Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгән ябай итек тә, юғары сифатлы күн - сафьяндан тегелгән **ситек** тә, ғәҙәттә, биҙәкләнә. Ситек башҡорттар араһында киң таралмаған. Халыҡтың ярлы ҡатламы **сабата** кейә. Башҡорт сабатаһы рус сабатаһынан еңел айырыла, сөнки уның уңы, һулы юҡ, ҡайһы аяҡҡа кейһәң дә була. Сабата башҡорттарҙың милли аяҡ кейеме түгел һәм И.И. Лепехин һүҙҙәре буйынса, XVIII быуаттың аҙағында сабатаны башҡорттар бөтөнләй киймәгән. Ҡариҙел йылғаһы бассейны һәм Ағиҙел йылғаһының урта ағымы буйында көн күреүселәр уны баҫыу эштәрен башҡарғанда ғына кейгән.





Өҫкө кейемдәр тураһында һүҙҙе дауам иткәндә, башҡорттарҙа һарыҡ тиреһенән тегелгән толоптарҙан тыш, **тун, билле тун** һәм йылҡы тиреһенән тегелгән һәм шуға ла **йылҡы тун** йәки **ҡолон тун** тип йөрөтөлгән кейемдәр булған. Йылҡы тун һәм ҡолон тун бик боронғо кейем иҫәпләнә, унда тиренең йөнлө яғы тышҡа ҡаратып тегелгән, үҙ-аллы ла, толоп өҫтөнән дә кейелгән. Ҡолон тун йылы биреп кенә ҡалмаған, толопто дымдан да һаҡлаған. И.Г. Георги был кейемде түбәндәгесә һүрәтләй: "...башҡорттар тунды ҙур йылҡы тиреләренән тегә һәм аттың ялы мотлаҡ арҡа буйына тура килә. Ел булған көндө был кейемдәр бик сәйер күренә".

✓ *Балалар менән эшләү тигәндә, балаға шиғыр ятлатыу менән уны ирекле ижадҡа йәлеп итеү араһында айырма булырға тейештәр. Тәүгеһе - әле яңы ғына формалашып килгән шәхесте ҡалыпҡа индереү ҙә булыуы бар. Бында сама кәрәк.*



# РУХИӘТТЕ ҺАҠЛАУ - йәғни Яңы "Ҡуңыр буға"

**Оло илебеҙҙе етмеш йылдан ашыу етәкләгән советтарҙың коммунистик партия режимы емерелеү менән элек бөтөнләй ҡаҡшамаҫ булып тойолған ҡоршау-ҡоролмалар берәм-берәм ҡоларға тотондо. Тәүҙә Советтар Союзы емерелде, аҙаҡ уның өлөшсәләре тарҡала башланы. Былар барыһы ла уларҙың яһалма, йәғни өҫтән ҡушып ойошторолғанын, тәбиғи түгеллеген күрһәтте. Тап шул ваҡытта үҙ теләге һәм ихтыяжы буйынса берләшкән төркөм-төркөм кешеләр берәмектәре формалаша башланы. Дворяндар ойошмаһынан башлап йорт комитеттарына тиклем әллә күпме ижтимағи ойошмалар ямғырҙан һуң сыҡҡан бәшмәк ише баш ҡалҡытты. "Мөгөҙ һәм тояҡ" берекмәһен барлыҡҡа килтергән Остап Бендер үҙе көнләшерлек был хәлгә! Әммә ундай ойошмаларҙың барыһын да бер ҡалыпҡа һалып үлсәп булмайҙыр. Ана шундай етди маҡсатлы, аныҡ перспективалы берәмектәрҙең береһе - Урал аръяғындағы "Ҡуңыр буға" ижади ойошмаһы. Колхоз-совхоздар ҡолап ятҡанда, кешеләргә эш урыны булмаған бер мәлдә ниндәй ижади ойошма ул, тип әйтер берәү. Ысынлап та, хәҙерге еңел булмаған заманда ижади ойошма ни эшләй ала? Уларҙы ойоштороуҙың зарурлығы нимәгә ҡайтып ҡала? Ижади ойошма ғына барлыҡҡа килтереп, тормошобоҙҙо алға ебәреү мөмкинме? Ошо һәм башҡа һорауҙарға күренекле шағир, прозаик, "Ҡуңыр буға" ижади ойошмаһы етәксеһе Мәүлит ЯМАЛЕТДИН менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**▸ Мәүлит ағай, һуңғы йылдарҙа һин донъяла күҙәтелгән бер күренешкә иғтибар итмәй ҡалмағанһыңдыр, тием. Ул да булһа, һәр төрлө дәүләт, милли дәүләт булараҡ, юҡҡа сыға барған һымаҡ. Әлбиттә, быны үҙ сәбәптәре бар. Беренсенән, глобаллӘшеү, халыҡтарҙың тығыҙ аралашыуы, интеграция дәүләттәрҙең, бер үк ваҡытта уларҙың милли сиктәрен юя барһа, икенсенән, милләтте инҡар итеүҙең Америка модуле бар донъяға көсләп тағыла. Беҙҙең илдә 1917 йылдан һуң дин дәүләттән нисек ситкә ҡуйылһа, бөгөн килеп дәүләт етәкселәре милли ихтыяжды һанға һуҡмаҫҡа тырыша, күрмәмешкә һалыша. Әгәр ҙә Рәсәйҙә Америка модуле тормошҡа ашырыла ҡалһа, аҙ һанлы халыҡтарҙың юҡҡа сығыу ҡурҡынысы бар. Үҙәктең бындай сәйәсәте Рәсәйҙә үҙенең тарихи ватанында йәшәүсе милләттәрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуын, был хәлдең бик ауыр һөҙөмтәләргә алып килерен дә күҙаллау ҡыйын түгел. Рәсәй батшалығы дәүерендә, мәҫәлән, башҡортто дәүләт түгел, ә башҡорт йәмғиәте, ғаилә һәм дин һаҡлаған. Бына әле һеҙ яңы формалағы йәмғиәт төҙөгәндә мин юғарыла килтергән хәлдәрҙе иҫтә тоттоғоҙмо? Йәмғиәттәрҙең дә төрлөһө бар: өҫтән ҡушып төҙөлгәндәре, үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгәне. Һеҙ төҙөгән йәмғиәт ошо бүленештең ҡайһыһына ҡарай?**

- Әлбиттә, рухиәтте һаҡлау - милләтте һаҡлауҙың бер төрө икәнен бик яҡшы иҫтә тотоп эш иттек "Ҡуңыр буға" ижади ойошмаһын төҙөгәндә. Һин дөрөҫ һиҙемләйһең - бөгөнгө глобаллӘшеү процестары аҙ һанлы халыҡтарҙың донъянан юйылыуын тиҙләтәсәк кенә. Шуға күрә ер йөҙөндәге аң кимәле үҫешкән һәр бер милләт үҙ-үҙен йотолоуҙан һаҡлап ҡалыу сараһын күрергә мәжбүр. Иң беренсе сиратта, әлбиттә, мәҙәни ҡиммәттәрҙе һаҡлауға иғтибар йүнәлтеләсәк. Бер дәүләттең икенсеһен, ҙурыраҡ милләттәрҙең вағыраҡтарын, көсһөҙөрәктәрен йоторға тырышыуҙары (үҙенә күрә шул уҡ глобаллӘшеүгә ынтылыу) элек тә булған. Мәҫәлән, боронғо Ҡытай иләймәндәренең яҙып ҡалдырғаны булыр: "Төркиҙәрҙең ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен һәм ауыҙ-тел ижадын юҡҡа сығармай тороп, уларҙы буйһондорорға тырышыу - бикәр ғәмәл". Ә инде һорауыңдың икенсеһенә килгәндә, был ойошма Урал аръяғы тип йөрөтөлгән төбәк ижадсыларының теләген иҫәпкә алып, үҙенән-үҙе, ирекле рәүештә барлыҡҡа килде. Үҙенән-үҙе тигәс тә, уның артынан йөрөүселәре, ижади дәрт менән яныусылары булмаһа, бер генә ойошма ла буш урында хасил булмай инде.

**▸ Бына һин, Мәүлит ағай, ижади көстәрҙе тупларға, ҡуҙғатырға кәрәк, тиһең дә бит, ә әүҙемлекте ойоштороп буламы икән? Һуңғы йылдарҙа республикала күҙәтелгән кире күренештәргә ҡаршы ижадсылар ойошоу ғына түгел, үҙ мөнәсәбәтен ҡырҡа позиция алып белдереүсе лә табылманы.**

- Әүҙемлекте нисек ойоштораһың да, нимәгә юҫыҡ тотаһың бит! Әгәр эшкә илке-һалҡы ҡарап, ниндәйҙер шәхси мәнфәғәт көтәһең икән - бер ни ҙә барып сыҡмаясаҡ. Бөтә ғилләә - ихласлыҡ менән эскерһеҙлектә. Мәҫәлән, "Ҡуңыр буға" йәмғәт ойошмаһы барлыҡҡа килеп тә өлгөрмәне, Әбйәлил районында күсмә семинар уҙғарып та ебәрҙек. Унда Айһылыу Хәсәнованың бына тигән поэмаларын тикшерҙек, әлеге көндә Белоретта икенсе семинар үткәрергә әҙерләнәбеҙ. Бер-ике ай эсендә эре-эре дүрт-биш ҡулъяҙма алдыҡ. Бына ошолор инде ижади дәртте ҡуҙғатыу, әүҙемлекте ойоштороу.

**▸ Халыҡ үҙ дәүләтен төҙөгәндән һуң милләт статусын ала. Һин юғарыла телгә алған ҡытайҙар, мәҫәлән, моноэтник дәүләт төҙөп, бөгөн донъяла һәр йәһәттән алға китте. Был Рәсәй шарттарында мөмкин түгел, сөнки Рәсәйҙәге һәр милләт үҙенең тыуған ерендә йәшәй. Шул уҡ ваҡытта беҙ ойошоп йәшәүҙең ырыу, ара, зат формаларына ла кире ҡайта алмайбыҙ, фирҡә юлы ла беҙгә ҡулай түгел һымаҡ. Бына ошондай шарттарҙа "Ҡуңыр буға" ижади ойошмаһы милләтте ойоштороу йәһәтенән нимә эшләй ала?**



- Ҡасандыр "Халыҡтар дуҫлығы әҙәбиәттәр (әҙиптәр) дуҫлығынан башлана", тигән лозунг бик көнүҙәк ине. Ысынлап та, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, быны нигеҙендә оло мәғәнә ята. Шуның кеүек, әҙәбиәттәрҙең (әҙиптәрҙең) ойошоуы халыҡтың ойошоуына бәрәбәр, тип әйтергә була. Быға башҡорт халҡының тарихынан байтаҡ миҫалдар килтерергә була. Мәҫәлән, мәшһүр "Урал" йырының ижад ителеүенә бәйле риүәйәттә, ете ырыу сәсәндәре гимн дәрәжәһендәге йырҙың һүҙҙәрен, ҡурайсылар уның көйөн күмәкләшеп ижад итеүе хаҡында бәйән ителә. Йәнә бер миҫал: башҡорт халҡының классик оҙон көйҙәре XVII-XVIII быуаттарҙа - милләт тарихының иң ҡанлы, фажиғәле осорҙарында тыуған. Йәғни, халыҡ үҙ-үҙен һәм рухи берҙәмлеген һаҡлап ҡалыр өсөн әлеге лә баяғы ижадҡа мөрәжәғәт иткән. Ана шул бер үк ҡайғы кисереп, берҙәй шатлыҡ тойғоһо уртаҡлашып йәшәү халыҡтың ойошоуын, тырым-тырағай таралмауын тәьмин иткәндер ҙә. Әлбиттә, "Ҡуңыр буға" йәмғәт ойошмаһы матди яҡтан халыҡтың хәлен яҡшырта алмаҫ, әммә әҙәбиәткә, сәнғәткә ылығыусыларҙы бер сафҡа туплап, уның рухиәтен байытыу буйынса байтаҡ эштәр башҡара алыр, тип өмөт итәм. Ҡасандыр милләтебеҙҙең төп генофондын тәшкил иткән ырыу-ҡәбиләләр формалашҡан, халыҡтың ауыҙ-тел ижадының абсолют күпселеге ижад ителгән һәм яҙып алынған төбәктә башҡаса булыуы мөмкин түгел. Атаҡлы сәсәндәр һәм көйсө-ҡурайсылар әрүахы беҙҙе шуға саҡыра.

**▸ Милләтебеҙ тарихының иң ҡанлы йылдарында тыуған йырҙар-моңдар бөгөн беҙҙең рухты һаҡлауы тураһындағы фекереӊ менән килешәм, ағай. Ғөмүмән, мәҙәниәтебеҙҙең милләтебеҙҙе һаҡлауы хаҡында билдәле ғалим Вәкил Хажин "Киске Өфө"-лә шулай тигәйне: "Халҡыбыҙҙың үҙ-үҙен генетик яҡтан һаҡлай алыу һәләте бар. Беҙҙе мәҙәниәтебеҙ һаҡлай. Мәҙәниәт беҙҙе башҡа халыҡтарҙан айыра торған байлыҡ ҡына түгел, ул беҙҙе һаҡлай торған ҡалҡан. Мәҙәниәткә милли кейем кейеп, сәхнәгә сығып ҡурай тартыу, йырлау йә бейеү генә инмәй. Унда беҙҙең эпостарыбыҙ, әкиәттәребеҙ, кейемдәребеҙ, милли аш-һыуыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, йола-традицияларыбыҙ, үҙ-ара һәм башҡалар менән мөнәсәбәт үҙенсәлегебеҙ, эске мәҙәниәтебеҙ, холҡобоҙ, темпераментыбыҙ һ.б. бар. Беҙ төрлө конкурстар, бәйгеләр, милли байрамдар, һабантуйҙар, йыйындар үткәрәбеҙ. Бөгөн тотош алған ваҡытта беҙҙең милли идеология юҡ та кеүек, әммә йөрәгендә башҡорт рухы булған кеше, ошондай милли мәҙәни сараларҙа ҡатнашып, тамаша ҡылып, милли тормош һыуһынын ҡандыра..." Вәкил Хажин менән килешергә лә, килешмәҫкә лә була. Сөнки "Әгәр ҙә кеше сәйәсәт менән шөғөлләнмәһә, сәйәсәт уның үҙе менән шөғөлләнәсәк", тигән бик аяуһыҙ һүҙҙәр ҙә бар. Шулай түгелме?**

- Әлбиттә, һәр кемдең милли мәҙәниәткә, уның халыҡ тормошонда тотҡан урынына үҙ ҡарашы, үҙ мөнәсәбәте. Кешене фекерләүҙән тыйып булмай, сөнки дөрөҫлөк бәхәстә генә түгел, ә ошондай ҡараштар төрлөлөгөндә лә тыуа. Беҙҙең бөгөнгө һүҙебеҙ мәҙәниәттең мөһим тармаҡтарының береһе булған әҙәбиәт һәм ижад хаҡында бара. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һин башта телгә алған Америка модуленә эйәреү, уның ҡалыптарына яраҡлашырға маташыу беҙҙә лә үҙен нык һиҙҙерә. Әле 60-сы йылдарҙа уҡ океан артында булған зыялылар Америка халҡының матур әҙәбиәткә битараф булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала торғайны. Ғөмүмән, ундағы рухһыҙлыҡ хаҡында йыш ишетергә тура килә. Уларҙы ярым робот сүрәтендә күҙалларға мөмкиндер. Рәсәйҙә, шул иҫәптән, Башҡортостанда ла мәҙәниәткә, әҙәбиәткә ҡараш әллә ни маҡтанырлыҡ түгел - был үҙгәртеп ҡороуҙың әсе емештәренең береһе. Беҙ демократия тип кәпәс сөйөүен сөйҙөк, ләкин уның ил халҡына, бигерәк тә аҙ һанлы халыҡтарға, уларҙың мәҙәниәтенә, теленә ниндәй әҙемтәләр һаласағын күҙ алдына ла килтермәнек шикелле. Шундай шарттарҙа телебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе ҡурсаусы әҙәбиәтте юғалтмайынса һаҡлау, уны нисек тә артабан үҫтереү зарурлығы алға баҫа.

**▸ "Ҡуңыр буға"ның Башҡортостан Яҙыусылар союзы секциялары эшенән төп айырмаһы нимәлә? Минеңсә, әгәр ҙә ул был ойошманың эшен бермә-бер ҡабатлауға ҡоролһа, ҡыҙығы булырмы? Мин был йәмғәт ойошмаһын, исеменә ҡарап, башҡараҡ юҫыҡтағы ойошма итеп күрәм. Бәлки, унда барлыҡ ижади көстәрҙе берләштереүҙе төп маҡсат итеп ҡуйырғалыр?**

- "Ҡуңыр буға" ойошмаһының иң мөҡәддәс бурысы - балалар менән эшләү, уларҙы ижадҡа ылыҡтырырға тырышыу. Был беҙҙең уставтағы төп шарттарҙың береһе. Эшмәкәрлек барышында беҙ урындағы башҡорт ҡоролтайҙары бүлексәләре, хакимиәттәрҙең мәғариф һәм мәҙәниәт бүлектәре менән тығыҙ бәйләнеш урынлаштырырға ниәтләйбеҙ. Сөнки беҙ үҙебеҙ ижадта ниндәйҙер уңыштарға ирешеп тә, алмаш әҙерләүгә битараф булһаҡ, рухиәтебеҙҙең шишмәләре яйлап һайығасаҡ. Был хаҡта яҙыусыларҙың дөйөм йыйылыштарында, съездарҙа ла һәр саҡ әйтелә килә. Ана шул балалар менән эшләү дәүерендә уларға халыҡсанлыҡ, ижадтағы милли рух тойғоларын һеңдереү мөмкин булсаҡ. Ә эш алымдарына килгәндә инде, улары йылдар һәм юлдар аша килә торған күмәк хеҙмәт һөҙөмтәһе тип күҙаллана.

*"Ҡуңыр буға" ойошмаһының иң мөҡәддәс бурысы - балалар менән эшләү, уларҙы ижадҡа ылыҡтырырға тырышыу. Был беҙҙең уставтағы төп шарттарҙың береһе. Эшмәкәрлек барышында беҙ урындағы башҡорт ҡоролтайҙары бүлексәләре, хакимиәттәрҙең мәғариф һәм мәҙәниәт бүлектәре менән тығыҙ бәйләнеш урынлаштырырға ниәтләйбеҙ. Сөнки беҙ үҙебеҙ ижадта ниндәйҙер уңыштарға ирешеп тә, алмаш әҙерләүгә битараф булһаҡ, рухиәтебеҙҙең шишмәләре яйлап һайығасаҡ. Был хаҡта яҙыусыларҙың дөйөм йыйылыштарында, съездарҙа ла һәр саҡ әйтелә килә.*

**▸ Балалар менән эшләү тигәндә, балаға шиғыр ятлатыу менән уны ирекле ижадҡа йәлеп итеү араһында айырма булырға тейештер, тим. Тәүгеһе - әле яңы ғына формалашып килгән шәхесте ҡалыпҡа индереү ҙә булыуы бар. Бында сама кәрәк. Бер мәл сәсәндәр конкурсы барғанда**

***✓ "Ҡуңыр буға" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегендә башҡа барлыҡ ижади үә ижтимағи ойошмаларҙа булмаған, халыҡтың рухын, ғәмен уятырлыҡ ниндәйҙер сараларҙы йә алымдарҙы күрге килә барыбер.***

**мин сәхнә артында ҡот осҡос күренештең шаһиты булдым. Бер баланы ата-әсәһе сәхнәлә сығыш яһарға өндәй, теге ҡарыша, илай, ялбара, халыҡ алдына сыҡҡыһы килмәй. Илата-илата ҡыуып сығарҙылар үҙен. Һуң ул баланың күңелендә сәнғәткә, шиғриәткә ҡарата нәфрәт кенә уянасаҡ бит. Шулай түгелме? Һөйләне бала ятҡа белгән шиғырын. Аяныслы хәл-ваҡиға хаҡында ине һөйләгәне. Күҙҙәренән йәшен ағыҙып, илай-илай һөйләне. Был хәлде баланың шиғри йөкмәтке тәьҫиренә биреләүе тип ҡабул иткән тамашасы ҡул сапты, тик күҙ йәштәренең сәбәбе башҡа төрлө ине. Юғарыла мин "ирекле ижад" терминын юҡҡа ғына килтермәнем. Беҙ балаларҙы ижадҡа йәлеп иткәндә мәктәптең мәжбүр итеү принцибынан ситтә торорға тейешбеҙҙер, тип уйланыла. Һеҙ яңы ойошмаға композиторҙарҙың да йәлеп ителеүе хаҡында әйтә биреп ҡуйғайнығыҙ. Улар һеҙҙең эшмәкәрлектә ни рәүешле ҡатнашасаҡ?**

- "Ҡуңыр буға" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегендәге яңылыҡтарҙың береһе - ойошмаға ижади яҡтан күрһәткән ойошма булып үҫешеп етеүен күрге килә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙең ҡаҙанда ғына ҡайнауҙан ситкәрәк сығырға кәрәк беҙгә. Был - заман талабы. Шулай ҙа "Ҡуңыр буға" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегендә башҡа барлыҡ ижади үә ижтимағи ойошмаларҙа булмаған, халыҡтың рухын, ғәмен уятырлыҡ ниндәйҙер сараларҙы йә алымдарҙы күрге килә барыбер. Уны шундай итеп ойошторорға кәрәк: ойошмаға шағир-яҙыусыларҙан тыш, башҡа барлыҡ төр ижадсылар ҙа, ижадты ҡабул итеүселәр ҙә ашҡынып торһон. Әйткәндәй, ниңә ойошмаға "Ҡуңыр буға" исеме бирҙегеҙ? Әгәр ҙә ул тарихи юл атамаһына бәйле икән, мәғәнәһен ойошма эшмәкәрлеге нисек аҡлар, тип уйлайһығыҙ?

**ижади яҡтан күрһәткән ойошма булып үҫешеп етеүен күрге килә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙең ҡаҙанда ғына ҡайнауҙан ситкәрәк сығырға кәрәк беҙгә. Был - заман талабы. Шулай ҙа "Ҡуңыр буға" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегендә башҡа барлыҡ ижади үә ижтимағи ойошмаларҙа булмаған, халыҡтың рухын, ғәмен уятырлыҡ ниндәйҙер сараларҙы йә алымдарҙы күрге килә барыбер. Уны шундай итеп ойошторорға кәрәк: ойошмаға шағир-яҙыусыларҙан тыш, башҡа барлыҡ төр ижадсылар ҙа, ижадты ҡабул итеүселәр ҙә ашҡынып торһон. Әйткәндәй, ниңә ойошмаға "Ҡуңыр буға" исеме бирҙегеҙ? Әгәр ҙә ул тарихи юл атамаһына бәйле икән, мәғәнәһен ойошма эшмәкәрлеге нисек аҡлар, тип уйлайһығыҙ?**

- Әйтеүемсә, һәүәҫкәр композиторҙар күңеленә ойотҡо һалынды, улар ойошмаға берләшеү идеяһын хуплап ҡаршы алды. Киләсәктә уларҙың да өмөттәрен аҡлайһы ине. Ә ойошманың исеменә килгәндә, башҡорт халҡының иң шиғри һәм иң мауыҡтырғыс эпосы "Ҡуңыр буға" ошо тирәлә ижад ителгән. Ундағы топонимика быны раҫлап тора:

**федераль үҙәк финанс йәлләмәй? Берәү әйтмешләй, "Милләтте комфортҡа ынтылыу юҡҡа сығара..."**

- Чечендар - бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Уларҙы аҡса менән генә юҡҡа сығарыуҙары - ай-һай! Үҙебеҙҙең милләттең ижади потенциалын һаҡларға, үҫтерергә ине. Халыҡ ҡаҡшамаҫ рухы менән тере, шуның менән көслө. Рухты ҡеүәтләндереүсе күренеш - ижад һәм уның емештәре.

**▸ Энтузиазмға ҡоролған ғәмәл иң ышаныслыһы булалыр ул, тием. Аҡсаға башҡарылғаны ваҡытлыса килеп сыға. Юғиһә, беҙ ниндәйҙер уй-идея тапһаҡ, тәүҙә кеҫәне ҡапшап ҡарайбыҙ ҙа, шунан елкәне тырнап, "аҡса бумағас - бумай" тиергә өйрәнгәнбеҙ. Шулай бит?**

- Уныһы шулай инде. Нишләтәһең, заманы шундай. Ә бит үҙебеҙҙең һоҡланғыс эпостарыбыҙҙы, әкиәттәребеҙҙе, риүәйәттәребеҙҙе, йыр-көйҙәребеҙҙе, ғөмүмән, бик юғары кимәлдәге фольклор өлгөләрен тыуҙырған ижадсылар һис бер хаҡ һорамайынса башҡарған был эштәрҙе. Һин әйтмешләй, энтузиастар,

**Башҡалар үҙҙәре лә белмәйенсә, беҙҙең мәҙәниәткә, тарихҡа, сәнғәткә, асылға ынтыла. Һеҙ әгәр ҙә эш объекты итеп рус телле мәктәптәрҙе алаһығыҙ икән, бының да үҙ плюстары буласаҡ.**

- Райондарҙағы мәғариф бүлектәре менән берлектә положение эшләп, "Минең беренсе китабым" тигән ижади конкурс иғлан итеү күҙҙә тотола. Иң яҡшы тип табылған шиғырҙарҙы, хикәйәләрҙе һ. б. әҫәрҙәрҙе китап итеп сығарыу һәләтле балаларҙы ижадҡа ылыҡтырыусы сараларҙың береһе булыр, тип өмөтләнәбеҙ. Мин элек Учалы яҙыусылар ойошмаһын етәкләгәндә ундай тәжрибәне ҡуллана инек. Бынан тыш, быйылғы уҡыу йылында рус телле мәктәптәр араһында башҡорт халыҡ эпостарын һөйләү буйынса уҡыусы балалар конкурсын уҙғарыуҙы ла планлаштырғанбыҙ. Инициатива һәм тәҡдим менән Мәғариф министрлығына, урындарҙағы мәғариф бүлектәренә сығыу өсөн документ әҙерләнә. Юҡһа, урыҫ, украин һ. б. милләт балалары ғына түгел, ә үҙ телен өйрәнеү мөмкинлегенән мәхрүм булған башҡорт балалары ла халҡыбыҙ-

вазифаһына дәғүә итер өсөн элекке һәм хәҙерге Ҡытай шиғриәтен биш бармағы һымаҡ белергә һәм, иң мөһиме, үҙенә лә шиғыр яҙырға кәрәк булған. Йәғни, шиғриәт буйынса имтихан биреп кенә вазифа биләргә мөмкин булған. Шуға ла боронғо Ҡытайҙағы мәҙәниәт, фән, ижтимағи фекер үҫешенә ғәжәпләнәһе түгел. Был өлкәләге бөйөк асыштар Ҡытайҙан килә. Хатта донъялағы иң беренсе китап та Ҡытайҙа баҫылған бит.

**▸ Этнотуризм өсөн, мәҫәлән, 5 йондоҙло отелдар төҙөү кәрәкмәй. Киләсәктә, әгәр ҙә Ҡуңыр буға юлын туристик зона тип иғлан итеп булһа, был Уралтауыбыҙҙы һаҡлауҙың бер формаһы ла булыуы ихтимал. Нисек кенә тимә, туристик зоналар дәүләт тарафынан һаҡлана, һатылмай, арендаға бирелмәй. Бәлки, һеҙҙең ойошма йәмәғәтселектең фекерен ошо йүнә-лештә формалаштырыуға булышлыҡ итә алыр. Өлгө өсөн бағыусылар табып, бәлки, ойошма ағзалары Ҡуңыр буға юлы буйлап йылына бер тапҡыр үтергә лә тейештер. Һәр туҡталған урында бер ижади сара үткәреп була. Ойошма**

# МИЛЛӘТТЕ ҺАҠЛАУ УЛ,

## ижади ойошмаһы тураһында

төбәктә йәшәп, ижад иткән һәүәҫкәр композиторҙарҙы йәлеп итеү, бөтә сараларҙы улар менән берлектә уҙғарырға тырышыу, ижадтарын пропагандаларға ярҙам итеү. Ә улар беҙҙең төбәктә байтаҡ: Мөхәррәм Сәлимов, Илгиз Йомағужин, Римма Ғәлина, Юлай Моратов, Азамат Усманов, Булат Пирғәлин, Фәрит Хәсәнов, Илнур Ҡәләмов һ. б. Әҙәби ижадҡа килгәндә инде, ҡулъяҙмалар менән эшләү - төп эшебеҙ буласаҡ, сөнки һәр бер китаптың нигеҙендә ҡулъяҙма ята. Был өлкәлә велосипед уйлап сығарырға түгел. Киләсәктә, бәлки, был ойошмаға башҡа төр ижад кешеләрен дә ылыҡтырып булыр. Мәҫәлән, рәссамдар. Әйткәндәй, рәссамдар яғынан ундай тәҡдимдәр булды, әммә ул саҡта беҙ уставты ҡабул итеп өлгөргәйнек. Ләкин был тоткарлыҡ түгел - кәрәк булһа, уставҡа үҙгәреш индереү ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫ, тип уйлайым.

**▸ Донъя картаһында Васюки тигән ҡала юҡ. Рәсәйҙә һәм Белоруста Васюки тигән ауылдар бар барлыҡҡа. Ильф һәм Петровтың "12 ултырғыс" тигән әҫәрендә донъяла булмаған Васюки ҡалаһы "Планета-ара шахмат федерацияһы" ҡалаһына әүерелә. Был ҡаланы ни өсөн телгә алам һуң? Әгәр ҙә "Ҡуңыр буға" эшен баштан уҡ юғары кимәлдә, оҫта ойошторғанда, Васюки ҡалаһындай уҡ булмағанда ла, Ҡырғыҙстанда - Сыңғыҙ Айтматов, Ҡаҙағстанда Олжас Сөләйманов ойошторған ижади форумдарҙы хәтерләткән, йәғни башҡорт халҡын, Башҡортостанды бар донъяға**

понимика быны раҫлап тора: Учалы районына ҡараған Ҡурташ, Белорет районындағы Ямантау, Ирәмәл, Рәз, Ҡағыташ, Әбйәлил районының ғорурлығы булып ҡиблаға һуҙылған Ҡырҡты тауы. Икенсенән, әлеге эпостың китаптарға инеп киткән версияһы Әбйәлил сәсәне Мөғәлләм Мирхәйҙәровтан яҙып алынған, ә уның йыр формаһындағы вариантын Белорет районы Исмаҡай

***Райондарҙағы мәғариф бүлектәре менән берлектә положение эшләп, "Минең беренсе китабым" тигән ижади конкурс иғлан итеү күҙҙә тотола. Иң яҡшы тип табылған шиғырҙарҙы, хикәйәләрҙе һ. б. әҫәрҙәрҙе китап итеп сығарыу һәләтле балаларҙы ижадҡа ылыҡтырыусы сараларҙың береһе булыр, тип өмөтләнәбеҙ. Мин элек Учалы яҙыусылар ойошмаһын етәкләгәндә ундай тәжрибәне ҡуллана инек. Бынан тыш, быйылғы уҡыу йылында рус телле мәктәптәр араһында башҡорт халыҡ эпостарын һөйләү буйынса уҡыусы балалар конкурсын уҙғарыуҙы ла планлаштырғанбыҙ.***

ауылында йыраусы Ноғман Тайбановтан Ғ. Сәләм яҙып алған. Өсөнсөнән (булһа була бит тап килеүҙәр), эпос көньяҡ башҡорттарына һундарҙың һөжүм итеүе (беҙҙең эраның II-III быуаттары) һәм төн башҡорттарынан Минәй тигән батырҙың милләттәштәренә ярҙамға барыуын һүрәтләүҙән башланып китә. Был идея беҙҙең ижадтағы үҙ-ара ярҙамлашыу, теләктәшлек, эскерһеҙ дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренә ишаралай. Һәр хәлдә, "Ҡуңыр буға" тигән исем үҙе үк беҙҙе берләштереү символына әүерелергә тейеш, тип уйлайым.

**▸ "Ҡуңыр буға"ны, ана шулай халыҡ тарафынан ойошторолған йәнле хәрәкәт итеп күрге килә лә. Бөгөн Чечняға ни өсөн**

йәғни, күңел талабы буйынса рухиәтте байытыусылар булған улар. Беҙ күҙ алдына килтергән ваҡытта бит яҙыусылар, композиторҙар союздары булмаған. Союз тигән ғәләмәт ижадсыларҙан совет власын һәм коммунистик идеологияның өҫтөнлөгөн аҡса түләп данлатыр өсөн булдырылған ижтимағи институт. Урыҫтың сатирик яҙыусыһы Владимир Войнович юҡҡа ғына: "Социалистический реализм - это восхваление начальства в доступной ему форме", - тип яҙмағандыр.

**▸ Төп эш объекты итеп мәктәпте билдәләүегеҙ оҡшай. Юғиһә, һуңғы 20 йыл эсендә мәктәп ниндәй генә реформалар, инновациялар, стандарттар, закондар һөжүменә дусар ителмәй. Ул яңылыҡтарҙы хатта уҡытыусылар үҙҙәре лә белеп өлгөрмәй, белһә лә, аңлай алмай. Шундай шарттарҙа, миненсә, мәктәп фәҡәт рухи ҡиммәттәргә таянып ҡына тотороҡло була алалыр. Өфөлә бер парадоксаль хәл күҙәтелә: башҡорт булмаған ата-әсәләрҙең күбеһе балаларын башҡорт гимназияларында һәм мәктәптәрендә уҡытырға теләй. Уларҙың был ынтылышы халҡыбыҙ педагогикаһының баланы әхлаҡлы итеп тәрбиәләүҙә уйнаған роле, өҫтөнлөгө хаҡында һөйләй.**

ҙың бөйөк рухи ҡомартҡыларын белмәй үҫә. Был сараны башта төбәк кимәлендә үткәреп ҡарарға ине, һуңынан күҙ күрер. Исемен шартлы рәүештә "Кобайыр" тип алырға була. Шуныһы: унда бер "Урал батыр" менән генә сикләнмәйенсә, башҡа эпик әҫәрҙәрҙе лә яттан һөйләү ҡараласаҡ. Быларҙан тыш, бүтән ҡыҙыҡлы саралар уҙғарыу ҙа күҙ уңында тотола. Тик улары әлегә сер - йә күҙ тейер, йә иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауыртыр.

**▸ Әгәр ҙә ошондай йәмәғәт ойошмаһын Ҡуңыр буға юлы буйлап туристик сәйәхәт идеяһы менән берләштергәндә, нисек була?**

- Иншалла! Әгәр ошо төбәктән сыҡҡан һәм республиканың рухи-мәҙәни тормошонда ҙур урын биләгән шәхестәребеҙҙең күтәрмәләүе, һәр төрлө ярҙамы булһа (һис юғы, тел ярҙамы), һин күҙаллаған сараларҙы ла ойошторорға мөмкин булыр ул. Бөтәһенә эскерһеҙлеккә, ихласлыҡҡа бәйле. Урындарҙағы етәкселәрҙең дә ижад кешеләрен төптән аңлауы талап ителер, моғайын. Тарих шуны күрһәтә: зирәк аҡыллы иләймәндәр һәр ваҡыт үҙҙәренең эшендә яҙыусыларҙы, шағирҙарҙы, ғалимдарҙы файҙаланған. Боронғо Ҡытай дәүләтен генә алайыҡ: унда ағута (чиновник)

**тик ижади үҫеш проблемалары, яңы ижад емештәрен тикшереү, уларҙы баһалау менән генә мәшғүл булһа, ул бығаса эшләп килгән ижади ойошмаларҙың эшен ҡабатлау ғына булыр ине.**

- Был идея иҫ киткес шәп! Әммә уны тормошҡа ашырыр өсөн йәмәғәт ойошмаһы түгел, ә дәүләт структуралары, уларҙың ҡыҙыҡһыныулы инициативаһы кәрәк, сөнки уны бойомға ашырыуға ниндәйҙер кимәлдә сығымдар талап ителә. Туризм һәр ваҡытта ла һәр дәүләттең үҙ ҡарамағында булған. Тик кем уның менән булышыр тиһең беҙҙә? Бының өсөн әлеге маршрутты ойошторорға тейеш булғандарҙың милли ғорурлығы, үҙаңы, мәҙәниәт кимәле бик юғары булыуы шарт. Әлбиттә, "Ҡуңыр буға" юлы буйлап туристик маршрут ойоштороуҙы тейешле кешеләргә тәҡдим итеп ҡарарға була. Тик уны кемдендер аңлауына шикләнәм. Ғөмүмән, нисек кенә булһа ла, уны эш планына индереп ебәрергә кәрәктер. Һәр бер эште башлау ғына көс, артабан, уйға уй ялғап, уны дауам итәһе генә ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәнән күренеүенсә, бик күпте эшләргә һәләтле ижади ойошма. Һәр хәлдә, беҙ яңы ойошма етәксеһенең һүҙҙәрендә быны тойомланыҡ. Ә ҡалғанын ваҡыт үҙе күрһәтер. Ижади ойошмаға Ҡуңыр буға юлындай оҙон һәм бәрәкәтле ғүмер теләргә генә ҡала.**



**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Телһеҙ булһамы, анауы һүҙҙәрҙе Зәһираға әйтмәгән булыр ине. Әйткән бит аҡыл эйәһе Лопе де Вега, "Тел кешегә бәғзе уйҙарын йәшерә алһын өсөн кәрәк", тип. Алдаҡсы, тимәк, Илнурҙың теле, хыянатсы, уйындағын әйтеп торғас...**



Гөлнур ЯҠУПОВА

# СОНАР

(Хикәйә)

*"Дөрөҫлөккә оҡшамаған һымаҡ хәҡикәттән дә гүзәлерәк нәмә юҡ".*
*Стефан Цвейг.*



Май етте. Бөрөләрҙең сырт-сырт килеп сәтләүектәй ярылғаны ишетелеп тора, донъя күҙгә күренеп уяна. Ошо мәлдә танышҡайнылар. Ниндәй йәмле килгәйне былтырғы яҙ! Ә быйыл? Юҡ уның өсөн яҙ, юҡ. Күрәһең, ул ағастар япраҡ ярған минутта түгел, ә кешеләрҙең күңелдәрендәге боҙ ҡоршауҙар асылғанда башланалыр?

Ни гонаһ шомлоғо, баҡса осонда олатаһы ултыртҡан ҡарағас сырхаулап ҡына япраҡ ярҙы. Илнурҙың сәңгелдәге бәүелгән ҡеүәтле ботаҡ бөтөнләй ҡороно. Тиктәҫкә түгел был, әсәһе әйтмешләй. Урамға, йортҡа, күңелгә шом инде. Бер көн Илнур түҙмәне, ҡыу ботаҡты бысып ташланы. Бүтәнсә унда сәңгелдәк бәүелмәҫ... Кисен, йәне әрнеүгә түҙә алмай, гел әсе балы өҙөлмәй торған бер ҡарсыҡҡа барып, лаяҡыл иҫереп ҡайтты.

-Телһеҙҙән телһеҙ тыуасағын һеҙ беләһегеҙме, юҡмы, - тип һөйләнә-һөйләнә карауатҡа барып ауҙы.

Иртәнсәк Зәһираның ҡарашынан уҡ бөтәһен дә аңланы: әйткән икән теге күңелен өйкәп йөрөгән һүҙҙәрҙе. Ярай, әйткәне яҡшы, артабан һөйләшеүе еңелерәк булыр.

-Зәһира, баланы табырға ярамай, аңла шуны, - һөйләшер нимәһе шул ине. - Укол һалырҙар ҙа...

- Юҡ, юҡ, юҡ! - тип һөрән һалды кеүек Зәһира: аҡылдан яҙырға яҡынлашҡан күҙҙәрме шулай ҡысҡырҙы? Ул йән тетрәткес ауаз әле лә Илнурҙың ҡолағында яңғырап тора.

Бала инде үҙенең барлығын иҫкәртә, Илнур төндәрен уның тын алышын тойғандай була, ирекһеҙҙән ҡулы менән уны иркәләй, һыйпай. Шуғалырмы, Зәһира һаман врачҡа барыуҙы һуҙа. Ә таң атыуға тағы:

- Баланы табырға ярамай!

- Илнур, ниңә шулай ҡыланаһың әле, - тип әсәһе лә ҡаршы төшөп ҡараны. - Ни күрһәк тә күрербеҙ...

- Күргем килмәй ул телһеҙ балағыҙҙы!..

- Балағыҙҙы, тисе, балабыҙ инде, үҙебеҙҙеке, аһа.

Шунда Зәһираға әллә нимә булды. Атылып килеп Илнурҙың яғаһынан бөрөп тотоп һелкетергә тотондо, ике-өс төймә шартлап өҙөлөп, иҙәнгә ҡойолдо. Шул иҫенә килтерҙеме, ҡулын ысҡындырҙы ла, Илнурҙың йөҙөнә ҡараны.

- Күрә алмайым һине! -тип бышылданы уның күгәренгән ирендәре, зәңгәр ялҡын бөрккән күҙҙәре лә шуны ҡабатланы.

Ошо хәлдән һуң да айлап йәшәне әле уларҙа Зәһира. Һаман да өмөтө өҙөлөп бөтмәгәнме икән? Әммә тормош селпәрәмә килгәйне инде. Бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәгәс, күҙҙәр осрашып торҙо, әммә бүтәнсә һөйләшмәне улар. "Ә, был һинме ни?" тип төбәштеләр ҙә тиҙерәк бер-береһенән ҡастылар. Инде өйҙә бер телһеҙ урынына ике телһеҙ ине...

Элек дүрт күҙ менән көтөп ала торған төндәр ҙә уларҙы яраштыра алманы. Илнурҙың әле һүнмәгән дәрте йылытҡан ҡайнар ҡосағы ла иретә алманы Зәһираны. Боҙ ине ул... Күпме була боҙҙо ҡосаҡларға, күпме була! Ә бит элек... Тәҙрәнән төшкән ай яҡтыһында ике ғашиҡ мөхәббәт минуттары кисерә, Зәһира караүат ситенә ултырып сәсен үрә (үрмә, Илнур барыбер тағата бит толомдарыңды!), ире иҙәндәге йомшаҡ балаҫта ултырған килеш башын уның тубығына һала. Һала ла, шырт сәстәре менән ҡытыҡлай, ярһыулы хистәрҙән бүртенгән сикә тамырҙары менән тубыҡтағы бығаса өнһөҙ-тынһыҙ булған ниндәйҙер бер тамырҙы эҙләп табып уята, дөпөлдәп тибергә мәжбүр итә. Ҡушлап типкән тамырҙар дуэты! Илнур һөйгәненең ихласлыҡ менән тулы тәненең һәр күҙәнәген үбергә тип ашҡына, үҙе уның ҡулдарының наҙына ирей... Ҡайҙа, ҡайҙа ул минуттар? Шул уҡ ай йомарт яҡтыһы менән шул уҡ бүлмәне яҡтырта. Оло донъяла, ғаләмдә бөтәһе лә әүәлгесә. Ә бына уларҙың кескәй генә донъяһында бөтөнләй бүтәнсә...

* * *

-Мин һине күрә алмайым!

Илнур ошо аяуһыҙ һүҙҙәрҙе тәү ҡат ишеткәндәй, ҡапыл бөршәйеп ҡалды, ниңәлер ҡулы менән күҙен ҡапланы, әйтерһең, сыбыртҡы менән һуҡтылар. Шунан, һыҙланыуына түҙә алмай, үрле-түрле йөрөй башланы.

Китте Зәһира. Ғәфү итә алманы. Ғәйепләме Илнур? Тормош ҡанундары... Туҡта, теймә ҡанундарға! Теймә! Ниңә үҙеңде еңә алмай бер булған булдың? Ниңә Зәһираның әсәһе "Улың тыуҙы" тип телеграмма һуҡҡас та Өфөгә барманың? Әсәйең оло башын кесе итеп барып ҡайтты ла баһа.

Ураҡ бөтмәгән, эш күп, тип һылтауланың. Эш ырҙын табағында ғына арлы-бирле ҡалғайны бит. Сентябрь аҙағы ине. Тимәк, улың хәҙер йәш тә һигеҙ айлыҡ булып киткән. Инде татылдап йүгереп йөрөйҙөр. Татылдап? Йөрәге сәнсеп китте, үҙе лә һиҙмәҫтән:

- Әсәй! - тип ҡуйҙы.

Әсәһе, шуны ғына көткәндәй, һауыт-һаба яғынан өлтөрәп килеп сыҡты.

- Әү, балам.

- Минең улым хәҙер атлайҙыр инде.

- Аһа, атламай, татылдап йүгереп йөрөйсө, - тип һалмаһынмы ҡарсыҡ. - Ай, алла... Әйтә яҙҙым.

Шулай тине лә, тағы мейес яғына инә һалып китте. Илнур, ниҙер һиҙенеп, әсәһенең артынан эйәрҙе.

-Һин нимәлер ишеттеңме әллә, Рәсилә ҡайтҡан ти инең, ул ниҙер һөйләнеме? Күргәнме Зәһираны?

- Күргән-күргән, фото алып ҡайтҡан, миңә ебәргән, "Өләсәйемә - Исмәғил ейәненән" тип яҙылған. Күрҙең, атайындың исемен ҡушҡан балаға, онотмаған. Эй, бигерәк иртә алып китте шул Исмәғилемде анау ҡәһәр һуҡҡыр үпкә сире, ейәнен күреп, ҡалай һөйөнөр ине лә...

-Туҡта әле, әсәй, иламай тор. Рәсилә тағы нимәләр ти. Исмәғил атлап йөрөй, тиме?

- Татылдап йүгереп йөрөй, тип тораһың уға, әллә ышанмай. Ана, барып күр, ышанмаһаң...

- ...

- Эй, әйтеп бөтөрҙөм инде, әйтмәҫкә ҡушҡайнылар ҙа. Рәсилә Зәһира киленде ҡунаҡҡа апҡайтҡан, барып ингәйнем, улың мине бер тамсы ят итмәй, итәгемә менде лә ултырҙы. Уф, хыялый булам инде һеҙҙең менән. Алтын кеүек ейәнемде һөйә алмай зарығып ултыр инде бына.

- Зәһира үҙгәргәнме?

- Әҙерәк тулыланып, һылыуланып киткән һымаҡ.

- Нимә ти?

- Һаумы, ҡәйнәм, - ти инде, ни тиһен...

Әсәле-уллы шым булдылар, күҙгә-күҙ бағыштылар.

-Юҡ, теле юҡ юҡлыҡҡа. Һуң уны былай ҙа аңлап тораһың бит инде. Мин гел киленем менән үҙемсә һөйләшеп йөрөнөмсө элек тә, бер-береңде аңлар өсөн тел генә кәрәктер шул... Бөтөн әҙәм аптырай инде беҙгә. Таш бәғер һинең Илнурың, тип кенә торалар.

Әсәһенә инде был турала башларға ирек кенә ҡуй. Ә бит ҡасан ғына әле шул уҡ кешеләргә ҡушылып, үҙе лә күпме елегенә үтте. Хәҙер улар һәйбәт, Илнур ғына - таш бәғер. Аумаҡай бер, әсәһе лә. Үҙеңсе, үҙең? Эй, аумаҡайҙан аумаҡай тыуа инде.

Илнурҙың башында төрлө уйҙар ҡайнашты. Диванынан айырылып, ишек алдына сыҡты, күҙе күнегеп бөткән нимәләргә әле күргәндәй булып йотлоғоп ҡараны. Ҡараманың бысылған ботағы төбөнән сибек кенә бер һабаҡ йән яралған түгелме? Ике-өс япраҡ ишараты ла бар. Яҙ бит тышта. Уның тормошона Зәһира килеп ингәндән бирле ергә әйләнеп ҡайтҡан дүртенсе яҙ.

Илнур ҡапҡаны асып, тышҡа сыҡты, аяҡтары үҙенән-үҙе баҫыу яғына атланы. Ҡалын ҡар аҫтында иҫән-һау ҡышлаған ужымдар йәм-йәшел зөбәржәт түҫөндә йәйрәп ята. Эйелеп, уларҙы һыйпап алды: ниндәй йомшаҡ был ужымдар, әйтерһең дә, сабый сәстәре... Устары янып һулҡылдап китте Илнурҙың. Ул турайып баҫты, тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалды. Эргәләге сауҡалыҡта һандуғастар һайрай. Моңдары менән донъяны хайран итеүсе ата һандуғас - сонар ти бит, инәһе түгел, ти. Ғәжәп. Ата һандуғас, моғайын, инәһе күкәй баҫҡанда, бала сығарғанда һөйөнөслө татлы һағыштарына сыҙамай йырлайҙыр. Ниңә Хоҙай Илнурҙы һандуғас итеп яратмаған икән? Йәнен һыҙлатҡан хистәренә түҙерлек әмәле ҡалмаған минуттарҙа һайрап ебәрер ине, исмаһам. Һайрап, тигәндәй, теге "Аҡ тирмә"лә анау шағирҙарҙан да арттырып телгә һалышып ултырғайны түгелме Илнур? Ҡапыл асылған тел ҡеүәһенә үҙе лә шаҡ ҡатҡайны.

Ата һандуғас... Сонар... Ни генә тимә, тәбиғәтте тоя белә инде ул Илнур. Ҡайындар нимә серләшә, талдар нимә бышылдай, барыһын да ишетә кеүек. Ана, балыҡ ҡарпый. Әллә ул күккә ырғырға сәмләнә? Тәбиғәт тә үҙенсә һөйләшә ләһә! Тыңлай ғына күр, аңлай ғына бел. Кеше лә тәбиғәт балаһы. Шунда Илнур ошо уйының айышын тотоп алды. Бына ни өсөн ул Зәһираның телһеҙлегенә тәүҙә үк иғтибар итмәгән, бына ни өсөн уны һүҙһеҙ ҙә аңлап, ишетеп, тойоп торған. Тәбиғәттең үҙ асылын белдерергә мең сараһы бар. Кеше өсөн тел бөйөк, тел зарур, әммә бит кешенең дә үҙ асылын күрһәтергә мең сараһы бар!

Илнур баҫыуҙан ашығып ҡайтты ла, йыуынып, кейенергә тотондо. Зәһираны барып күрергә кәрәк, алып ҡайтырға... Тик... Нимә тип әйтер һуң ул уға. Күпме ғүмер тауыш бирмәй ят та, ни йөҙөң менән күренәһең? Ни телең менән аңлатаһың ҡылығыңды?

Ике ҡулы менән сәстәрен йолҡа тотоп, ултыра төштө. Күңеле һүнде, ҡанаты һынды үҙенә үҙе биргән ҡәтғи, тура һорауҙарҙан. Юҡ, Зәһира уның менән һөйләшмәҫ тә хәҙер. Их, Илнур, Илнур, инде һиңә нишләргә? Барып һүҙеңде лә әйтә алмағас, ниңә кәрәк һиңә тел?

Тел! Тел? Эйе, тел, ул ғына ғәйепле Илнурҙың был бәхетһеҙлектәргә тарыуында. Телһеҙ булһамы, анауы һүҙҙәрҙе Зәһираға әйтмәгән булыр ине. Әйткән бит теге аҡыл эйәһе, кем ине әле ул, Лопе де Вега, шикелле, "Тел кешегә бәғзе уйҙарын йәшерә алһын өсөн кәрәк", тип. Алдаҡсы, тимәк, Илнурҙың теле, хыянатсы, уйындағын әйтеп торғас...

Әсәһе ҡайҙа йөрөй икән. Моғайын, Рәсиләләрҙәлер. Киленен, ейәнен күреп кинәнеп йөрөйҙөр. Ә ниңә һуң әле Илнурға ла, әсәһе ише аумаҡайланып, башын һантыйға һалып барып кермәҫкә? Берәй йөҙ грамды төшөрөргә лә. Илнур был уйына һөйөнөп китте. Ҡалтыранған ҡулдары менән стакан тултырып араҡы һалды ла бер тында эсеп тә ҡуйҙы. Ҡаны ҡыҙып китһә лә, быуындары йомшарҙы. Юҡ, йөрәге етмәй барыбер, барып баҫа алмай Зәһира ҡаршыһына. Ебегән! Йүнһеҙ!

Илнурҙың аңы томаланды, үҙен-үҙе күрә алмау тойғоһо боғаҙын быуҙы, бөтә нәмәне ватҡыһы, ҡырғыһы, үлтергеһе килде. Ярһып, табаҡ-һауыт яғына сыҡты, ҡабаланып бысаҡ эҙләне. Өҫтәл тартмаһын асып ҡараны-бысаҡ юҡ. Шул әсәһенең һалған еренән әйбер табам тимә. Әһә, бына сәнске, уның менән дә теләгән эште ҡылырға була. Нимә теләй әле ул? Ә, ул бит әлеге хыянатсыны - телен юҡ итергә, үс алырға теләй!

Йылдар буйы килгән ғазаплы кисерештәр мискәнең бөкөһөн атып ташҡан әсегән бал кеүек икән. Илнур аҡылын юйҙы. Бына ул сәнскенең һалҡын һабын ҡыҫып тотоп алды, ирендәре ҡымтып ябылған ауыҙын һәрмәп ҡараны. "Йәшенденме, ҡурҡаҡ, ҡастыңмы?" тип, урт эсендә йылыла ирәйеп ятҡан теленә үсәп яназы. Шунан телен һәлендереп сығарҙы ла, сәнске менән һелтәнде. Сәнске теш ҡаҙнаһына тейҙе, ахыры, ҡан борҡоно. Был инде үҙен-үҙе аңламаҫ хәлгә килгән Илнурҙы ҡотортоп ҡына ебәрҙе. "Әле һин шулаймы ни, һатлыҡ йән, шулаймы ни?" тип эстән һөйләнеп, яңынан телен сығарҙы. Ауыҙын ҡулдары менән шаҡарып тигәндәй асты - телдең һис тә сығаһы килмәй ине. Илнур был юлы уны ысҡынмаҫлыҡ итеп тештәре менән ҡыҫып алды. Сәнске күҙенең эргәһендә генә ялтлап китте...

* * *

-Ат-тау! Атау!

Илнур ҡайҙандыр алыҫтан ишетелгән ошо тауыштан иҫенә килде. Сабый бала тәтелдәп һөйләшкән кеүек. Ауырайған күҙ ҡабаҡтарын көскә асып, тауыш ишетелгән яҡҡа ҡараны: ултырғыста бер апай ултыра, тубығында орсоҡтай әйләнгеләгән кескәй малайға ниҙер һөйләгән кеүек. Илнур көсәнеп ҡолаҡ һалды:

- Йә, ҡолонсағым, тағы әйт әле, "атай" тиң әле.

- Ат-тау! - тип ҡысҡырҙы бала. Илнур терт итеп ҡалды. Бер апай тигәне үҙ әсәһе лә баһа! Ә алдындағы сабый кем? Томаланған мейеһен ярып үткән һиҙемләүҙән йөрәге тулап китте...

- Ҡолонсағым, мин бит һинең өләсәйең. Йә, "өләсәй" тиң әле.

- Зә-зәү! Өзә-зәү! - тип тәтелдәне сабый.

Ҡалай ҡыҙыҡ икән дәһә балаларҙың теле. Берәй заман еренә еткереп һөйләшергә өйрәнерме икән был малай? Өйрәнер, Илнур үҙе лә иҫ белгәнсе радио тигәнде "ындуйын" тип йөрөткән дә баһа. Туҡта әле, туҡта, "атау"ы - Илнур,"өзәзәү"е уның әсәһе булып сыға түгелме?..

Ә ҡайҙа ята һуң әле ул үҙе? Бите-башы уратып марля менән бәйләнгән... Тимәк... Больницала...

- Улым! Исмәғил! - тип ҡысҡырҙы Илнур. Ләкин тауышы сыҡманы. Ғәжәп, уның йәне, тәнендәге һәр күҙәнәге донъя ярып һөрән һалды, ә бер кем ишетмәне. Ҡайраҡтай булып уртына йәбешкән теле әйләнмәне, туң ирендәре ҡуҙғалманы, көсөргәнештән тартышҡан яңаҡ мускулдарының һыҙлауы йөрәгенә төштө...

**(Аҙағы. Башы 1-2-се һандарҙа).**

*✓ Ошо меңәр йылдар эсендә тыуып үҫкән һәр башҡорт үҙ күңелендә Урал бабабыҙҙың генетик хәтерен йөрөтә. Үҙеңде ҡорбан итеп булһа ла, халҡыңа үлемһеҙлек килтереү идеяһы һәр башҡорттоң мейеһенә код булып һалынғандыр ул.*

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП*

**Бер йырҙағы "Ғәзиз халҡым! Һинең яҙмыш үҙе ялҡын, үҙе һалҡын" тигән һүҙҙәрҙе һәр саҡ илап тыңлайым. Уйлап ҡараһаң, туған халҡыбыҙҙың бар яҙмышы утта янып, боҙло һыуға сумыуҙан ғибәрәт кеүек. Был йырҙа XX быуатта йәшәгән һәм фани донъяға күскән данлы шәхестәребеҙ тураһында һүҙ бара: "Хөсәйендәр, Мөбәрәктәр, Фәйзи Ғәскәр, Бәхтиҙәрең, Илфаттарың, Филүстәрең, Ишмуллалар беҙҙе ташлап китеп барғас, бушап ҡалды был донъялар..."**

# "ҒӘЗИЗ ХАЛҠЫМ! ҺИНЕҢ ЯҘМЫШ...

## Үҙе ялҡын, үҙе һалҡын..."



Ә XIX быуатта, унан да алдараҡ дәүерҙәрҙә, хатта тәүтормош осоронда ошондай аҫыл заттарыбыҙ был яҡты донъяны ташлап китмәгәнме ни? Күпкә аянысыраҡ, күпкә фажиғәлерәк булған бит уларҙың яҙмышы. Донъя яратылған осорҙа, хатта үлемдең ни икәнен дә белмәйенсә билдәһеҙлеккә юл тотҡан Урал, ахыр сиктә, үҙенең ғүмерен ҡорбан итеп, кешелеккә һәм тәбиғәткә үлемһеҙлек килтерә. Уның ошо тиңдәшһеҙ батырлығы мәңгелек хәтер булып, халыҡ күңелендә уйылып, мәшһүр эпос рәүешендә меңәр йыллыҡтар аша беҙҙең көндәргә килеп еткән.

Тимәк, ошо меңәр йылдар эсендә тыуып үҫкән һәр башҡорт үҙ күңелендә Урал бабабыҙҙың генетик хәтерен йөрөтә. Үҙеңде ҡорбан итеп булһа ла, халҡыңа үлемһеҙлек килтереү идеяһы һәр башҡорттоң мейеһенә код булып һалынғандыр ул. Шунан аңлашыла монгол-татарҙарға һәм башҡа илбаҫарҙарға ҡаршы йән аямай көрәшкән башҡорт ырыуҙарының фиҙәкәрлеге ҡайҙан килгәне! "Һуңғы һартай" әҫәрендә бөтә ырыуҙаштарын, ғәзиз улдарын ер ҡуйынына һалып, бер яңғыҙы тороп ҡалған Ялыҡ бей: "Үлем - бер ҡапҡа ул, һәр кем унан инергә тейеш! Ләкин белегеҙ: мин һуңғы яу булманым!" - ти.

XVII-XVIII быуаттарҙа Рәсәй империяһын дер һелкеткән башҡорт ихтилалдарында ҡатнашыусылар үҙҙәрен ҡотолғоһоҙ үлем көткәнен белмәгәнме ни? Улар ҙа бит үлемдән ҡурҡмаған, сөнки халыҡ азатлығы, тыуған Уралдың тейелгеһеҙлеге үлемдән көслөрәк булған. Юҡҡа ғынамы данлы батырыбыҙ Салауат Юлаев:

*Заманалар булған элгәре,*
*Булған илдең батыр улдары.*
*Баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр,*
*Бөтә ғәләм белгән уларҙы.*
*... Рухым күтәрелде минең дә,*
*Эйәрләнем мин дә атымды.*
*Дошман сафын тар-мар итергә*
*Изге яуға уҡтай атылдым, -*

тип, данлы-шанлы көрәшкә күтәрелә. Ә бит ул да ошо көрәштең аҙағы үлем менән тамамланасағын алдан белгән, үҙенең үлеме туған халҡын үлемһеҙлеккә илткән бер сылбыр икәнен милләттәштәренә әйтеп ҡалдырған: "Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ, минән батыр тыуыр донъяға!"

Һанай китһәң, үлем ҡурҡынысы алдында ла азатлыҡ ҡояшының бөләңгерт кенә булып күренгән нурҙарына табынған, шул нурҙар менән ғәзиз халҡының ҡараңғы тормошон яҡтыртырға ынтылыусы күпме шәхестәребеҙ булған! Үҙен күрә алмаусы бәндәләрҙең уға үлем көҫәгәнен белә тороп, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә йөрөгән, туған халҡын яҡтылыҡҡа, мәғрифәткә әйҙәгән аҡ күңелле шағирыбыҙ Аҡмулла ла үлемдән ҡурҡмаған! Үлемһеҙлек идеяһы ҡанының һәр күҙәнәгендә мөлдөрәмә тулы булғанғалыр, Александр Матросов исеме аҫтында дошман амбразураһын үҙ күкрәге менән ҡаплап, яуҙаштарына йәшәүгә юл асҡан Шакирйән Мөхәмәтйәнов та ғүмеренең һуңғы минуттарында үҙенең ысын башҡорт булыуы менән ғорурланып үлгәндер...

Рәссам Йәмил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" исемле картинаһын ҡарап ултырғанда ла күҙемә йәштәр тығылды, ҡолағымда йыр сыңланы:"Ғәзиз халҡым! Һинең яҙмыш үҙе ялҡын, үҙе һалҡын..." Ә һеҙ күрәһегеҙме, батырыбыҙҙың йәйәһе нисек кирелгән: ул сатыр кеүек, үҙенең артындағы барлыҡ башҡорт донъяһын ҡаплап тора. Иғтибар итегеҙ: меңәрләгән тирмәләрҙе, Урал тауҙарын дошман уҡтарынан ҡаплап, ҡалҡан булып баҫҡан бит ул һартайҙың һуңғы һуғышсыһы! Эйе, ул керешенә һуңғы уғын һалған, үҙенә табан иҫәпһеҙ-һанһыҙ дошман уҡтары осоп килгәнен дә күрә, тик кәүҙәһен таштай ҡатырған, аяҡтарын Урал тупрағына ныҡлап терәгән, йөҙөндә ҡурҡыуҙың әҫәре лә юҡ. Сөнки ул белә: әлмисаҡтан килгән рух көсө - тәү бабабыҙ Урал батырҙан һәр башҡорттоң ҡанына күскән үлемһеҙлек тойғоһо халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡаласаҡ. Көлдән яралған Феникс-ҡош кеүек, башҡорт халҡы үлемде еңеп, үлемһеҙлеккә хоҡуҡ аласаҡ!

*Йыландарҙы йотоп, Урал батыр*
*Үлем түшәгендә ятҡанда,*
*Тереһыуҙы бөркөп, йәшәү биргән*
*Тәбиғәткә, туған халҡына.*
*Уралымда үҫкән һәр башҡорттоң*
*Ҡаны буйлап аға тере һыу!*
*Шуға ла бит башҡорт өсөн үлем -*
*Үлемһеҙлеккә табан ынтылыу…*

**Сәүиә БИКМӨХӘМӘТОВА,**
**Салауат ҡалаһындағы 25-се башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АҠЫЛЛЫ ЙӘШТӘРЕБЕҘ...

## яңы һулыш килтерер

**Зөһрә БУРАҠАЕВА, яҙыусы:** Барлыҡ эштәрҙең дә киләсәк өсөн атҡарылғанын иҫәпкә алып, һүҙемде тап ошо тарафҡа йүнәлтеп, "кисәге"нән бигерәк, "иртәгәге" тураһында һүҙ әйтергә теләр инем. Миненсә, хәҙер генә түгел, ә һәр заманда ла артҡа ҡарап түгел, алға ҡарап хәрәкәт итергә кәрәк. Юғиһә, тарихыбыҙҙы яҡшылап белмәгән, һәр хәлдә, белергә тырышып та, күп факттарҙы үҙебеҙ өсөн асыҡлай алмаған бер заман булып алды, ә тарих ҡормалары асыла төшкәс, ҡасандыр данлы тарихыбыҙ, аҫыл ирҙәребеҙ булғанлығы тураһында ишеткән күбебеҙ шул тарихтың ҡайтырын көтә башланы. Кемдәрҙер һаман шуны көткән һымаҡ йәшәй бирә.

"Их, булған бит ирҙәребеҙ!"тип, батырҙарыбыҙҙың тарихтан ҡайтыуын көтөүҙән файҙа юҡ икәнлеген аңлайыҡ. Ни эшләргә һуң улай булғас, тигән һорау тыуыуы бар. Минә ҡалһа, яуап ябай: бары тик үҙ аҡылына, үҙ һәләтенә ышанып алға барыусы, төрлө телдәрҙе өйрәнеп, бүтән милләттәр араһында үҙен тиң тотоусы, шул уҡ ваҡытта үҙенең башҡорт булыуын да онотмаусы, хатта башҡортлоҡто тотоп тороусы йәштәребеҙгә эйәрергә кәрәк, тим. Улар - беҙҙең бөгөнгө көн геройҙары, улар беҙҙе алға әйҙәп барыусылар һәм глобалләшеү шауҡымында милләтте һаҡлап ҡалыусылар. Эйе, улар, урта быуын вәкилдәре кеүек, бюджет урындарында ғына эшләргә лә атлығып бармай, дәүләткә генә ышанып, ҡул ҡаушырып та ултырмай - йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәләренә, шул иҫәптән техник өлкәләрҙән дә халҡыбыҙға файҙаһы тейерлек һөнәр һайлай, яңы технологияларҙы үҙләштерергә ынтыла. Мине ошондай йәштәр һоҡландыра ла инде.

Ҡағиҙә булараҡ, ошондай күркәм сифаттарға эйә йәштәребеҙ уҡыу, эш, тип, сит ҡалаларға китә, тик ситкә китеп, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе онотмаһындар, бер ниҙән дә ҡурҡмаһындар, сит милләт вәкилдәре менән ғаилә ҡормаһындар, шул уҡ ваҡытта үҙҙәрен донъя граждандары итеп тойһондар ине. Шул мөҙҙәттә мәҙәниәтебеҙгә яңы һулыш өрөләсәк. Ә ситкә киткән йәштәребеҙ, иртәме, һуңмы, республикабыҙға ҡайтасаҡ, тип өмөтләнәйек, хатта шуға булышлыҡ итәйек, йәғни "Һеҙ Башҡортостаныбыҙға ҡайтып, уға хеҙмәт итергә тейешһегеҙ!" тигәнде аңдарына һеңдерәйек.

Һүҙ аҙағында милләттәштәргә шуны әйтке килә: үткәндәрҙән фәһем алырға кәрәк, тик үткәндәрҙе һағыныу, әрнеү тойғоһо менән үҙеңде бығауларға түгел, ә ҡараштарҙы киләсәгебеҙгә төбәп, барлығыбыҙға ҡыуанып, үҙебеҙҙән һуң да тоҡомобоҙҙо дауам итер балалар ҡалдырып йәшәйек.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҮҘЕҢ БУЛЫП ҠАЛ!

**Был көндәрҙә үҙебеҙ ҡатнашырға насип булған ҡайһы бер саралар, ҡайһы бер осрашыуҙар ошо хаҡта уйлатты: Хоҙай беҙҙе кеше итеп кенә түгел, милләт итеп тә яратҡан. Тел, йыр-моң, үҙебеҙҙе башҡаларҙан айырыр йөҙ-һыҙаттар, ҡылыҡ-фиғел биргән. Беҙ был Ерҙә Ул яратҡан милләт булып, Ул биргән телдә һөйләшеп, камиллыҡҡа ынтылып йәшәргә тейешбеҙ.**

Әммә Хоҙай ҡушыуы менән түгел, заман, айырым кешеләр сәйәсәте арҡаһында яҙмыштар буталып китә, кемдәрҙер хатта ғүмер дауамында түгел, бер-нисә ай эсендә лә икенсе милләттең телен үҙләштерә һәм үҙенекен онота ала. Ә бит Хоҙай алдына мотлаҡ ул яратҡан милләт булып барып баҫырға тейешбеҙ беҙ. Хоҙай үҙе яратҡанды бары тик үҙе генә юҡҡа сығара ала...

Әхирәттәге иң ауыр һынау - ошоноһо, Хоҙай алдында үҙ асылыңда яуап тотоу, тиҙәр. Сөнки Хоҙай беҙҙең йәндәрҙе Ергә үҙе яратҡан асылда йәшәп камиллашһын, иң Юғары аңға тиклем күтәрелһен өсөн ебәрә. Ә беҙ фани донъяла саҡта асылыбыҙҙы һанламай, үҙ хәлебеҙҙе ҡатмарлаштырабыҙ ҙа, баҡыйлыҡҡа оло гонаһ йөкмәп китәбеҙ...

"Үҙең булып йәшә". Бала саҡта башыбыҙҙан һыйпап, был донъяла күпте кисерергә өлгөргән олатай-өләсәйҙәр ҙә, башҡа өлкән кешеләр ҙә әйткәйне был һүҙҙәрҙе. Хәтерегеҙҙәме? Ләкин беҙ уны аңыбыҙ менән ҡабул итеп бөтмәйбеҙ әле бала саҡта. Шулай итеп, яҙмыштарыбыҙҙы яңылыштырып та ҡуябыҙ...

...Рәсәй телевидениеһының Беренсе каналынан бөйөк бейеүсе Рудольф Нуриев тураһында документаль фильм күрһәттеләр. Әрнеп ҡараным. Шундай бөйөклөк, илаһилыҡ ни өсөн шундай аяуһыҙ яҙмышҡа дусар ителгән, тигән уй баштан сыҡмай. Талант эйәләре үҙе донъя ҡуйһа ла, уның эштәре һаман халҡы телендә, уның иҫтәлегенә һаман ниндәйҙер ҡәҙер-хөрмәт күрһәтелә. Ә Рудольф Нуриев хатта үлгәндән һуң үҙе тураһында хәтерләһендәр өсөн миллиондар, миллиардтар ҡалдырһа ла, ул хәтер юҡ. Ни өсөн? Сөнки уның милләте лә, теле лә, иле лә юҡ. Аяныслы яҙмышының сәбәбе ошонда түгелме икән, тигән һығымтаға килеп йөрөйөм...

Бына шундай фәһемен биреп тора бит Хоҙай. Ниңә беҙгә ошондайҙарҙан фәһем алып, балаларыбыҙҙы яңылыш яҙмыштарҙан һаҡламаҫҡа?..

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КЕШЕНЕҢ АУЫРЛЫҒЫ... йәшәү кимәленә бәйлеме?

■ Вашингтон университеты (АҠШ) ғалимдарының яңы асышы күрһәтеүенсә, алкоголгә, тәмәкегә һәм наркотиктарға тартылыуыс кешеләр психик тайпылыштар менән яфаланыусылар рәтенән булып сыға. Ғалимдар 20 мең кешене тикшереп ҡараған, уларҙың 10 меңе - сәләмәт, ә 9142-һендә шизофрения, биполяр тайпылыштар (маниакаль-депрессив сондром), галлюцинациялар менән күҙәтелеүсе шизо-аффектив тайпылыштар, шулай уҡ кәйефтең йыш алышынып тороуы кеүек диагноздар ҡуйылған. Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, психик яҡтан сәләмәт булмағандарҙың 30 проценты мотлаҡ эскесегә әйләнә, психик сәләмәт кешеләр араһында ундайҙарҙың һаны 8 процент. Ауырыуҙарҙың 50 проценты наркотиктар ҡуллана, икенсе төркөмдә уларҙың иҫәбе яҡынса 18 процент. Шулай уҡ ауырыуҙар араһында башҡа тыйылған матдәләр ҡулланыу күрһәткесе лә юғары. "Бындай етди ауырыуҙар менән яфаланыусылар психик яҡтан сәләмәт булғандарҙан уртаса 12-25 йылға иртәрәк үлә, - тип аңлата доктор Сара Хартц. - Һәм алкоголь, тәмәке һәм наркотиктар ҡулланыу бында үҙ ролен уйнай. Психик яҡтан сәләмәт кешеләр, бигерәк тә йәштәр араһында һуңғы осорҙа тәмәке тартыусылар кәмей, ә психик сирлеләр араһында тәмәке тартыусылар иҫәбе бер кимәлдә тора - 75 процент".

■ Британия социологтары, иң ауыр көн - дүшәмбе, тигән мифты кире ҡаға. Бәхетиһен, иң ауыр хеҙмәт көнө булып шишәмбе тора икән. Һәр хәлдә, был тәғлимәт офис хеҙмәткәрҙәренә ҡарата бик дөрөҫ әйтелгән, ти ғалимдар. Тикшеренеүҙәр барышында 3 меңдән ашыу кешенән һорау алыуҙар үткәрелгән. Уларҙың 53 проценты билдәләүенсә, дүшәмбе кеше эшкә тотонорға тырышмай һәм уларҙы иртәгәге көнгә ҡалдыра. Был көндә күпселек хеҙмәткәрҙәр үҙ вазифаһына тәғәйен бурыстарын бөтөнләй башҡармай ҙа икән. Сөнки ял режимынан эш режимына көйләнеү бик ауыр бирелә. Һөҙөмтәлә, шишәмбе көнөнә эш йыйыла һәм хеҙмәткәрҙәр уларҙы йырып сығырға тейеш була. Шишәмбенең иң көсөргәнешле мәле ун ике тула ҡырҡ биш минуттан була - был ваҡытҡа эш тә күп, кеше лә эшкә тулыһынса көйләнеп китә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Грэм Уотерс әйтеүенсә, был көндә күптәр төшкө ашҡа туктамаҫҡа ла риза. Был көн шулай уҡ стрестарға бай көн булараҡ та билдәләнгән. Эксперттар билдәләүенсә, бындай күнелһеҙлеккә тарымаҫ өсөн эште аҙаҡҡа ҡалдырмаҫҡа һәм көндәлек эш режимын булдырырға кәңәш ителә.

■ Һуңғы 30 йыл эсендә ер йөҙөндә артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар һаны арта бара. Хәҙер ундайҙар иҫәбе 4 тапҡырға артҡан һәм миллиард кеше иҫәпләнә. Бөйөк Британияның халыҡ-ара үҫеш институты ғалимдары күптән түгел ошо хаҡта белдерҙе. Бигерәк тә үҫешкән илдәрҙә был проблема киҫкен тора. Һәр өсөнсө кеше һимеҙлек менән йонсой, шуға ла ғалимдар хәҙер хөкүмәткә граждандарҙың туҡлаНыу мәҙәниәтенә иғтибар бүлергә саҡыра. Югиһә, киләһе йылдарҙа инфаркт, инсульттар һаны артасаҡ, шәкәр диабеты сире киҫкенләшәсәк. Иң ҡыҙығы, халыҡтың йәшәү кимәле күтәрелгән һайын, уларҙың ауырлығы ла арта. Шул уҡ Бөйөк Британияла халыҡтың 84 проценты шундайҙар иҫәбендә.

ФАРАЗ

**Гәзиттең былтырғы 48-се һанында Таңһылыу Баһауетдинованың Бөрйән районындағы ғәжәйеп күренешкә арналған "Монармы? Параллель донъямы? Нимә булды был?" тип аталған республикала ҙур яңғыраш алған мәҡәләһенә 51-се һанда күп кенә гәзит уҡыусыларыбыҙ үҙенең мөнәсәбәт-ҡарашын белдерҙе. Бындайын күренеш хаҡында беҙ әлегә тик үҙебеҙсә фараз ғына йөрөтә алабыҙ. Әммә шуны ла онотмайыҡ: һәр бер ғилми асыш фаразлауҙан, күҙаллауҙан башлана. Миҫалға урыҫ яҙыусыһы Алексей Толстойҙың "Инженер Гарин гиперболоиды" фантастик романын ғына алайыҡ. Роман 1927 йылда яҙылып бөтә, ә лазер ҡоролмаһы Америка физигы Теодор Мейман тарафынан 1960 йылда ғына тәүге тапҡыр һынала. Уға тиклем 1916 йылда Альберт Эйнштейн киләсәктә шундай көслө нурҙы табыу хаҡында күрәҙәлек кенә ҡыла. Роман яҙылып бөткәндән һуң ғына инглиз физигы Поль Адриан Морис Дирак, немец физиктары Рудольф Ладенбург, Ганс Копферман һәм башҡа ғалимдар эксперимент юлы менән шундайын көслө нур барлығын теоретик яҡтан иҫбат итеүгә өлгәшә.**

# ТӘҠДИРҘӘГЕ БӨРЙӘН ҠАЛАҺЫ



## Иҫбатлау кәрәкме?

Тик 1960 йылда, йәғни лазер нурын һәм уның ҡеүәтен күҙ менән күреп инаныу мөмкин булғандан һуң ғына Алексей Толстойҙың фаразы булыуҙан туҡтаған, тимәксемен. Хәҙерге ваҡытта лазер ҡулланыу фәндә һәм практикала иң юғары технологияр исемлегендә йөрөй. Тап шуның кеүек, Бөрйән районында күренгән ҡала хаҡындағы күп һандағы фаразлауҙар фәҡәт ғалимдарҙың иҫбатлауынан һуң ғына барыһын да ышандырырлыҡ күренеш, ғилми асыш булып иҫәпләнер ине. Әммә бындайын күренеште иҫбатларға мөмкинме икән? Улай ғына ла түгел, быны иҫбатларға кәрәкме икән? Ни өсөн тигәндә, бары тик Хоҙай Тәғәлә, Юғары Аң кимәлендә генә аңлашылған төшөнсә-күренештәр ҙә бар бит әле донъяла. Ундай кимәлдәге күренештәрҙе, төшөнсәләрҙе иҫбатларға тырышыу шул уҡ Хоҙайҙы һәм Юғары Аңды шик аҫтына ҡуйыу, уларҙы инҡар итергә тырышыу ҙа булыр ине. Дөрөҫмөләр-юҡмылыр, бер ғалим йөрәты зәмзәм һыуына шик белдереп, химик анализ яһатҡан да, донъяла оҙаҡ йәшәй алмаған, тиҙәр.

Икенсе бер мәсьәлә. Ни өсөн Вангаһы Хоҙай Тәғәлә дөм-һуҡыр ҡалдырған һуң? Йәиһә, ғәрәсәт ҡубыуына эләгеп, йәш Вангелия осраҡлы рәүештә генә күҙенән яҙғанмы? Ә бит күнел күҙе күргәнде ул үҙ күҙҙәре менән күрә башлаһа, аҡылдан яҙыр ине. Тимәк, Хоҙай Тәғәлә уны уйы менән күргәндәрен үҙ күҙҙәре менән күреп аҡылдан яҙмаһын өсөн һуҡыр иткән, йәғни һуҡырайтып һаҡлап ҡалған. Тап шуның кеүек, әгәр ҙә беҙ Хоҙай яралтҡан донъяны бар тулылығында, бар нескәлектәрендә күрә башлаһаҡ, кешелек күптән аҡылдан яҙыр ине. Тимәк, донъяла күрергә яраған һәм ярамаған күренештәр ҙә була.

Урынлы һорауҙар тыуа: ниндәй ҡаланы күргән һуң бөрйәндәр? Уның беҙҙе уратып алған ысынбарлыҡ менән уртаҡлығы, бәйләнеше бармы? Ул ҡала ниңә быға тиклем шул урында һис юғы бер кешенең күҙенә салынмаған да, ниңә бөгөн килеп, ҡала фәҡәт шул урында пәйҙә булған? Ошо һорауҙарға бергәләп яуаптар эҙләп ҡарайыҡ.

## Үткәнме? Киләсәкме?

Үткән быуаттың 80-се йылдарында ниндәйҙер бер журналда ("Румбы фантастики" булһа кәрәк) 1842 йылдың авгусында Бородино яланынан алыҫ түгел бер урында күк йөҙөндә ғәжәйеп күренешкә шаһит булыуҙары хаҡында мәҡәлә уҡығайным. Унда бер нисә минут буйына кешеләр экрандағы кеүек һуғыш күренештәре һынланышын күҙәткән. Бородино яланындағы һуғышҡа теүәл утыҙ йыл үткәндән һуң күҙәтелгән был сағым. Мәҡәлә авторы был күренеште биохимия, фотосинтез фәндәренә таянып аңлатырға тырышҡан. Йәғни, Бородино яланындағы алышта ике яҡтан да күп һандағы яугирҙәр ҡатнашҡан. Унда күп ҡан ҡойолған, дары түгелгән, ҡылысҡа ҡылыс бәрелеүҙән заряд хасил булған һәм былар барыһы ла күккә саң менән күтәрелеп, үҙенсәлекле фотоэлементты тәшкил иткән. Ошо рәүешле һуғыштың бер өлөшө һауалағы фотопленкаға төшөрөлөп алынған да, йәнәһе, утыҙ йылдан һуң кислоталы ямғыр яуғандан һуң негатив позитивҡа әүерелгән. Был күренешкә шаһит булыусыларҙың ҡулында фиксаж йәғни фотоаппарат ҡына булмаған, тип ҡуя мәҡәлә авторы.

Әгәр ҙә Бөрйәндә күренгән ҡаланы ошо "Бородино сағымы" принцибы менән аңлатып ҡараһаҡ, күренеш ҡайһы йылдарҙың документаль кадрына тап килер ине икән? Тауҙар фонында ҡатлы бейек йорттар, самолеттар, мәсет күренгән икән, был

ШИҒРИ ҺҮҘ

# БӨРЙӘН МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Республика матбуғатында хәбәр ишетелгәнсә, быйыл 24 ноябрҙә Бөрйән районының Аҡбейек тауҙары өҫтөндә ҡала хасил булғаны күҙәтелгән. Юлаусыларға бишәр, туғыҙар ҡатлы йорттар, ҡала урамдары күренгән. Был мөғжизә бик күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Мин иһә уға ҡарата үҙемдең фекеремде шиғыр теле менән әйтеп бирергә булдым.**

*Хикмәттәрең һинең, эй, Тәбиғәт,*
*Икһеҙ ҙә ул, беләм, сикһеҙ ҙә.*
*Бына тағы ла бер мөғжизәнде*
*Күрһәтмәксе булдың һин беҙгә.*

*Әллә ҡайҙа сит-ят ерҙә түгел,*
*Ә нәҡ бына беҙҙең Бөрйәндә,*
*Аҡбейеккәй тауҙың көн битендә*
*Ҡала пәйҙә булған икән дә.*

*Ҡала пәйҙә булған ап-аҡ ҡына,*
*Төштә түгел, ә күҙ алдында,*
*Бер Хоҙайҙың рәхмәттәре менән*
*Мәсет манараһы сағылған.*

*Ҡайҙан килеп, ҡайҙа киткән ҡала,*
*Бәндәләргә нимә әшкәрткән?*
*Таш быуаттың серҙәр һағауылы -*
*Бөрйән иленме ул йәшәрткән?*

*Арҡайыммы тиһәм, оҡшамаған,*
*Түгел һымаҡ Ерҙең кендеге.*
*Буласаҡ бер башкорт ҡалаһымы*
*Иңләп йөрөй ғаләм кендеген?*

*Һорауҙар күп. Аңлап бөтөп булмай*
*Тәбиғәттең серле хәлдәрен.*
*Бәлки, беҙгә төбәп ебәрелгән*
*Был үҙенсә берәй билдәлер.*

*Бәрәкәтле Бөрйән тупрағында*
*Ҡала пәйҙә булған - афарин!*
*Хоҙай айырыуса яраталыр*
*Мөғжизәле Бөрйән тауҙарын.*

*Был ваҡиға, мин ышанам уға, -*
*Бер ишара килер көндәргә.*
*Башҡортостан, һинең тылсым көсөң*
*Бөрйәндәләр, эйе, Бөйрәндә!*

**Рәшит ШӘКҮР.**

мотлаҡ XX йә XXI быуатҡа тап килер ине. Ҡайһы берәүҙәр, Хоҙай Тәғәлә киләсәктә ошо урында ҡалҡып сығасаҡ ҡаланы күҙаллай, тигән фараз белдерә. Бәлки. Тик күренештең үткәндең йә киләсәктең сағылышы икәнлеген иҫбатлаусы дәлилдәребеҙ бармы һуң? Юҡ. Сираттағы һәр бер фараздың ғилми нигеҙе булмаһа, был хәл артабанғы фараздарҙы барлыҡҡа килтерә. Ошо рәүешле минең дә "Һигеҙенсе параллель" фаразым барлыҡҡа килде. Мин уны башҡаларға көсләп тағырға, минеке генә хаҡ, тип әйтергә лә йыйынмайым, бары тик үҙемсә аңлатмамды ғына килтерәм. Бәлки, ул кемдер берәүгә артабан фекер үҫтерергә, үҙенең фаразын булдырырға ярҙам итер.

### Ендәр донъяһы бармы?

Малик Ибраһимдың "Параллель донъя" тигән китабын уҡығанда беҙ йәшәгән донъяға параллель ете донъя барлығы хаҡында белдем. Шуларҙың берәүһе, беҙгә иң яҡыны - Ендәр донъяһы. Бәҡтиһән, Ҡөрьәндә яҙылған Ендәр донъяһы бар икән, ундағы "Ендәр" сүрәһе лә тап уларҙың барлығын иҫбатлай. Ҡөрьәндә ендәр бик йыш телгә алына. Беҙҙең эрабыҙ 1100 йылдары тирәһендә ендәрҙең Бөтә донъя һуғышы булып, унда изге ендәр еңеп сыҡҡан икән. Китапта яҙылғанса, ендәр донъяһы кешеләр донъяһына ҡарағанда ныҡ алға киткән. Улар беҙҙең кеүек ук йыһанды өйрәнә, йыһан караптары осора. Беҙ осоусы тәрилкәләргә ултырып, сит планета кешеләренең Ергә килеп төшөүен йыш ҡына күрәбеҙ. Бәҡтиһән, улар бер ҙә сит планета кешеләре түгел, ә космик караптарын ҡабыҙып, йыһанға сәйәхәткә йыйынған беҙгә параллель донъялағы ендәр икән. Бөтә хикмәт уларҙың шул осоу караптарын ҡабыҙыуҙа. Йәғни уларҙың двигателенән сыҡҡан төтөндәре фонында беҙ был күренеште лакмус ҡағыҙындағы һымаҡ күрәбеҙ икән. Күңеле таҙа, йөрәге асыҡ булғандарға ендәр донъяһы күренеп тора, тиҙәр. Ғабдулла ишан Сәиди ана шундай заттарҙың береһе булған.

Мин уҡыған баяғы китапта ҡалған алты параллелдә нимәләр булыуы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Шулай ҙа мин шул алты параллелдең береһен, әгәр ҙә улай түгел икән, өҫтәмә рәүештә шартлы "Һигеҙенсе параллель"дә күрәм Бөрйән ҡалаһын. Дөрөҫөрәге, тәҡдирҙәге Бөрйән ҡалаһын...

### Һигеҙенсе параллель

"Тыштағы зыярат" роман-диалогымды уҡыған кешеләргә тәҡдир параллелен енел аңлата алырмын. Романда ваҡиғалар ике донъяла, ике параллель юҫыҡта бара. Уның береһе - беҙ йәшәгән ошо ысынбарлыҡ, икенсеһе - Хоҙайҙың тәҡдиренә тап килгән донъя. Тәҡдир буйынса йәшәгән донъяла Әхмәтзәки Вәлидиҙең хыялдары тулыһынса тормошҡа ашҡан. Йәғни беҙ унда тулы ҡанлы үҙ дәүләтебеҙҙә үҙ гәскәребеҙҙе булдырып, үҙ хакимиәтебеҙҙе ойошторор, шәриғәт ҡанундары буйынса йәшәйбеҙ. Икенсеһендә инде 1917 йылда дин дәүләттән айырылған, шуның арҡаһында яҙмышы боҙолған кешеләр һәм халыҡтар хасил иткән атеистик ҡотһоҙлоҡта көн күрәбеҙ. Тәҡдир буйынса йәшәгән донъяла, электэлектән килгәнсә, тыуған еребеҙҙе һаҡлап, илебеҙҙе баҫып алырға, динебеҙҙе ирекһеҙләргә теләүселәргә ҡаршы үҙ гәскәребеҙ менән көрәшәбеҙ һәм унда егеттәр үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итеп, яуҙа һәләк була. Ә үҙ граждандарын йүнле эш, шөғөл менән дә тәьмин итә алмаған әле йәшәгән атеистик ҡотһоҙлоҡта тәҡдир донъяһында шәһит китеүселәр үҙ-үҙенә ҡул һала, йәғни тәҡдиргә тоғролоҡ күрһәтә. Суицидтың аңһыҙ үлем булыуын мин үҙ әҫәремдә тап ошо рәүешле аңлатырға теләйем дә инде. Тыуған районым Байма́ҡта, Ейәнсурала, Туймазы ҡалаһында, Стәрлетамаҡ ҡалаһының А. Инан исемендәге китапханаһында ошо әҫәрем буйынса үткән китап уҡыусылар конференцияларының барыһында ла минә:"Һеҙ әҫәрегеҙҙә суицидты аҡларға теләйһегеҙме?" тигән һорау бирҙеләр. Мин уларға: "Юҡ, аңларға һәм башҡаларҙы киҫәтергә теләйем", - тип яуапланым.

Хәҙер ошоларҙы Бөрйән ҡалаһы менән бәйләйек. Минә ҡалһа, ана шул тәҡдир параллелендәге курорт ҡалаһы ул Бөрйән ҡалаһы. Ысынлап та, әгәр ҙә 1917 йылда Октябрь инҡилабы булмаһа, беҙ Волганан Тубылғаса һуҙылған үҙ дәүләтебеҙҙә йәшәһәк, Бөрйән районы һымаҡ матур тәбиғәтле урында мотлаҡ рәүештә экологик яҡтан таҙа, иманлы, динле кешеләр йәшәгән йәтеш кенә Бөрйән ҡалаһы тап шул рәүештә булыр ине бит, тием. Ҡаланың экологик яҡтан таҙа булыуына унда төшөүсе самолеттарҙың ҙур түгеллеге лә ишара. Аэропорттың ҙур булмауы урындағы тәбиғәттең флораһын һәм фаунаһын һаҡлауға ла булышлыҡ итә. Бөрйән ҡалаһына бар донъянан килеүселәр тәүҙә ҙур самолеттар менән Башҡортостандағы башҡа ҙур ҡалаларға тиклем осоп килеп, артабан бәләкәй самолеттарға ултыра. Бөрйән ҡалаһына килеп еткәндән һуң инде улар артабан юлын йылға буйлап йә ныбай, йә еңел машинала дауам итә...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Әгәр ҙә халҡыбыҙ бөгөндән хаҡ диненә, үҙ асылына ҡайтһа, ғәмәлдәге Бөрйән ҡалаһы ҡалҡып сыҡмаҫ, тимә. Бөрйән ҡалаһының фәҡәт ҡурсаулыҡ янында күренеүе лә юҡтан ғына түгелдер. Белгестәр иҫәпләүенсә, ҡурсаулыкта 1917 йылдан башлап ҡына түгел, унан да күпкә алдараҡ бөтөнләй кеше аяғы баҫмаған урындар күп. Кемгә нисектер, минең өсөн һигеҙенсе параллель мөғжизәһе ул Бөрйән ҡалаһы.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерме һигеҙенсе көн

20-се көнгә һеҙ үҙегеҙҙең камиллашыу стандарттарын тәҙеүҙең биш төрлө ысулы менән танышҡайныҡ. Шуларҙы ҡайтанан уҡып сығығыҙ - уларҙы тормошоғоҙҙоң һәр осрағына ҡарата ла ҡулланаһығыҙмы? Бәхет һеҙгә ихтыярһыҙлыҡ һәм ҡыл да ҡыбырлатмау һөҙөмтәһе булып килер, тип көтмәгеҙ. Бәхет - ул аныҡ ғәмәлдәр һөҙөмтәһе, үҙеңдең көндән-көн яҡшыра барыуынды тойоу хистәре. Стандарттарығыҙ кимәлен күтәрә төшөгөҙ һәм үҙегеҙҙән максималь ғәмәлдәр кимәле талап итегеҙ. Тормоштоң бөтөн өлкәләрендә лә камиллыҡҡа өлгәшеү - айырым кешеләр өлөшө генә түгел. Эске донъябыҙҙа ниндәй көстәр һәм һәләттәр йоҡомһорауын беҙ хатта үҙебеҙ ҙә һиҙмәйбеҙ. Ер йөҙөнөң бөтөн бөйөк һәм уңышлы кешеләре лә был турала яҡшы белә. Маҡсаттарығыҙға ынтылышты ошо йондоҙҙар кимәлендә тоторға тырышығыҙ. Ҡурҡыу хисе тыуһа йәки дәртегеҙ һүрелә төшһә, үҙегеҙҙе "ҡыуалап, сыбыртҡылап" алыуҙан да тартынмағыҙ. Тиҙҙән даими күнекмәләр ғәҙәтегеҙгә әйләнер. "Йондоҙҙарға" ҡарап йәшәү икенсе асылығыҙға әүерелер.

**Тауышты өҫтәмә күнектереү**

5-се көндә беҙ һеҙҙең менән оҙаҡ йәшәү серҙәрен уртаҡлашҡайныҡ. Мәҫәлән, тауышты күнектереү сәләмәтлек бирә, тигәйнек.

а) тауышығыҙҙы тағы ла нығыраҡ итеү өсөн мөмкин тиклем түбән тонда тиҙ-тиҙ генә ошо күнекмәләрҙе һап ҡарағыҙ: пи, би, ми, фи, ви, ли, ри, ип, иб, ив, иф.

б) "м-м-м" тип мөмкин тиклем оҙағыраҡ һуҙығыҙ. Шулай биш тапҡыр ҡабатлағыҙ.

в)"а-а-а" тип биш тапҡыр йырлағыҙ, тик унан алда тәрән итеп тын алығыҙ һәм тәнегеҙ төпкөлөндә тойған көсөргәнеште сығарығыҙ.

**Үҙ йүнәлешегеҙ менән барығыҙ**

Үҙ йүнәлешеңде үткәрә белеү - тормошта уңыш ҡаҙаныу һәм ысын камиллыҡҡа өлгәшеүҙең төп шарттарының береһе. Беҙҙә йыш ҡына башҡалар эшләгәнде ҡабатлау дәрте уяна һәм, шулай итеп, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, беҙ ят ҡараштар тотҡонона әүереләбеҙ. "Нишләп һинең һаман да үҙ өйөң юҡ, нинә һаман өйләнмәй йөрөйһөң?" тип һорауы ихтимал яраткан әсәйең. "Юрист булырға уҡыр өсөн һин ҡарт инде",- тиер иң яҡын дуҫың. Маҡсат ҡуйығыҙ һәм тормоштан үҙегеҙгә нимә кәрәклеген аныҡ белегеҙ, шунан һуң ғына хыялығыҙға илтәсәк юлда эшләнергә тейешле ғәмәлдәрегеҙҙе ентекле планлаштырығыҙ. Әгәр һеҙ ысынлап та нимә теләгәнегеҙҙе белһәгеҙ һәм башҡаларға ҡарағанда үҙегеҙгә нығыраҡ ышаныуығыҙҙы ғәҙәткә әүерелдерһәгеҙ, башҡаларҙың нимә һөйләүе йәки уйлауы һеҙҙе әллә ни борсомаясаҡ.

Һеҙ күптән үҙ йүнәлешен тапҡан кораблгә оҡшарға тейешһегеҙ. Һеҙ үҙ маршрутығыҙҙы аныҡ беләһегеҙ, шуға күрә лә донъялағы башҡа судноларҙың йүнәлеше һеҙҙең өсөн әһәмиәткә эйә түгел.Үҙ юлығыҙҙан барыуығыҙҙы аңлау тойғоһо мейегеҙгә ял бирә һәм үҙегеҙгә ышаныусанлыҡ арттыра. Әгәр, мәҫәлән, мәктәп йылдарындағы дуҫығыҙ, вице-президентлыҡҡа дәғүә итә икән, уның һеҙгә лә үҙ маҡсаттарығыҙға ваҡытында өлгәшеүгә ышаныс тыуҙырыуы өсөн уға рәхмәтле булырға тейешһегеҙ. Көнләшеү тигән нәмә юғаласаҡ, ә башҡалар уңышына шатлана белеү һеҙҙең иң яҡшы сифатығыҙға әүереләсәк.

**Робин ШАРМА.**

---

ӘЙҘӘГЕҘ...

# КӨНСӨЛ БУЛМАЙЫҠ!

**Һин башҡаларҙың уңыштарына, яҡшы сифаттарына ихлас ҡыуанаһыңмы? Күркәм холоҡло кешеләр менән осрашҡандан һуң үҙ ҡылыҡтарыңа тәнҡит күҙлеге аша ҡарап, үҙ-үҙеңде тәрбиәләргә тотоноп китәһеңме? Һиндә бындай ынтылыш бар икән, тимәк, күңелеңдә көнсөллөк ята барыбер. Әммә бынһыһы аҡ көнсөллөк тип атала.**

Ләкин кешеләр күңелендә икенсе төрлө көнсөллөк өҫтөнлөк итеп китә ҡайһы саҡ. Ҡөрьәндә ул "хәсәд" йәки "хөсөт" тип атала һәм ҡара көнсөллөктә аңлата. Ошо насар тойғоға эйә кеше башҡаларҙың уңыштарын күреп яфалана, уның таланты, байлығы, матурлығы, белеме, балалары, малы һ.б. юҡҡа сығыуын теләй. Йөрәгендә хөсөт йөрөтөүсе ғәйбәт таратыуҙан, яла яғыуҙан, араларҙы боҙоуҙан, хәйлә ҡороуҙан, этлек эшләүҙән, кешеләрҙе дошманлаштырыуҙан, ғаиләләрҙе тарҡатыуҙан кинәнес таба, ошо юлда ҙур "уңыштарға" ла өлгәшә, хатта оппоненттарын тимер рәшәткә артына бикләүгә һәм уларҙы физик юл менән юҡ итеүгә тиклем барып етә.

Бөгөнгө көндә хөсөт күптәрҙең булмышын зәгифләй. Был сир байын да, фәкирен дә, хакимын да, ғалимын да, белемлене лә, белемһеҙҙе лә йәлләмәй. Шәхси аш булмәһенән алып етәкселәр кабинеттарына тиклем - бар урында рәхәтләнеп йәшәй, идара итә. Кешенең туймаҫ нәфсеһе, донъяның бар байлыҡтарын ҡулына төшөргән саҡта ла, туйыу белмәй, "ризаһыҙлыҡ" өсөн сәбәп эҙләй. Үҙенән яҡшыраҡтарҙы тапҡас, үҙ етешһеҙлеген йәшереүҙе көнсөллөктә таба.

Дин күҙлегенән ҡарағанда, хөсөт шайтандың иң һөҙөмтәле ҡоралдарының береһе. Тап көнсөллөк арҡаһында ерҙә беренсе енәйәт ҡылына, Әҙәм бәйғәмбәрҙең бер улы икенсеһен үлтерә. Йософ бәйғәмбәр көнсөл ағалары тарафынан ҡоҙоҡҡа ырғытыла, һуңынан ҡол итеп һатып ебәрелә. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һәм ислам диненең иң яуыз дошмандарының береһе Әбү Йәһилдең дошманлашыуы нигеҙендә яткан төп сифаттарҙың береһе көнсөллөк була. Ул Абдулла улы Мөхәммәттең бәйғәмбәр, Аллаһ рәсүле булыуын көнсөллөк арҡаһында ҡабул итә алмай. Иблис үҙе лә тәкәбберлек менән көнсөллөк арҡаһында фәрештәләргә дәрестәр биргән ғалимдан Аллаһы Тәғәлә ҡәһәрләгән затҡа әйләнә.

Һәр кеше - булмышы менән шәхес. Кеше үҙендә нимәнеңдер әҙерәк булыуын күреп көнләшә, зарлана, күберәк булыуын күреп, киреһенсә, тәкәбберләнә башлай икән, ул тере мәйеткә әйләнә. Ул, Раббыының тәҡдиренә ҡаршы килеүсе, Аллаһы Тәғәләнең мәңгелек сифаттарын инҡар итеүсе һәм ғаиләлә, йәмғиәттә, дәүләттә, үҙ аңында фетнә тыуҙырыусы меҫкен затҡа әйләнә. "Хөсөт көнсөлдө ҡоро ботаҡтарҙы йотҡан ут кеүек йота", тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр. Кем үҙенең тыныслығын боҙа, кем үҙенең тормошон бысрата, кем үҙенең ҡәлебен яндыра, төн йоҡоларын юғалта, хәләл нәмәләрҙән ләззәт тапмай? Көнсөллөктән яфаланған кешеләр улар. Ундайҙар был донъяла уҡ үҙен утлы ситлеккә бикләй.

Раббыбыҙҙан һиҙәйәт һорайыҡ, ҡәлебтәребеҙҙе көнсөллөктән, тәкәбберлектән һаҡлайыҡ, күңелдәребеҙҙән насар уйҙарҙы ҡыуып сығарайыҡ, үҙебеҙҙән, халҡыбыҙҙың, кешелектең үҫеше, бәхете өсөн изгелектә берләшәйек, бер-беребеҙгә нәсихәт ҡылайыҡ, изге юлда ярышайыҡ, булғанына шөкөр итәйек.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ.**



## 20 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Идеальный брак". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.30 Ночные новости.
23.40 "Познер" (16+).
00.40 "Замерзшие души". Комедия (16+).
02.30, 03.05 "Мелинда и Мелинда". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка" (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Старатели морских глубин. Найти затонувшие миллиарды". Док. фильм.
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.30, 14.50 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30, 19.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Женское счастье". Ток-шоу.
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Шеф полиции". Детективный сериал (12+).
